✓ *Зинһар өсөн, миңә бер күҙле иҡтисадсы табығыҙ әле. Сөнки бөтә ишеткәнем: "Бер яҡтан ҡараһаң...", "Икенсе яҡтан ҡараһаң..."*

*(Герберг Гувер).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11 - 17 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №37 (403)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бал йәрминкәләре...**

ҡала халҡын бал ашарға өйрәтте



4

**Исеме есеменә тап килә -**

ағылташтай балҡыта ул ижадын



11

**Күрше баҡсаһына ырғытҡан таш...**

үҙенә кире ҡайта, ишәйеп



12

**Көлкө менән...**

йәшәүҙе еңеләйтеп була



15

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бер шағирҙың: "Алғандарыңды беләбеҙ, ни бирҙең башҡортоңа?"- тигән һүҙҙәре бар. Шуға эйәреп...

*Риф ИҪӘНОВ, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе, эшҡыуар:* Шуға эйәреп: "Башҡортлоғоң бурысын үтәү өсөн нимәләр эшләнең?" - тип һорамаҡсыһығыҙмы? Мин иҫ белгәнемдән алып һәр бер башҡарған ғәмәлемде ғаиләмә, туғандарыма, халҡыма, илемә арнап йәшәнем. Милиция формаһы кейеп, хулигандар һәм бандиттар менән алышҡанда ла башҡорт ир-егетенең исемен юғары тоторға тырыштым. Өс баламды баш ҡаланың бер осонан икенсе осона трамвай менән башҡорт мәктәбенә йөрөтөп уҡытып, туған мәҙәниәтебеҙгә, тарихыбыҙға ылыҡтырып, уларға милли рухтағы тәрбиә бирҙем. Отставкаға сығып, үҙ эшемде асҡас та, беҙҙең халыҡ вәкилдәренең ҡулынан да эш килә, эшҡыуарлыҡ шөғөлө лә ят түгел, тигәнде башҡаларға иҫбатларға тырыштым һәм был юлда арыу ғына уңыштарға өлгәштем. Ныҡлап аяҡҡа баҫҡас, йөҙәрләгән милләттәшкә эш урыны бирҙем, уларҙы эшҡыуарлыҡ серҙәренә өйрәттем. Ижтимағи ойошманың етәксеһе булараҡ та иң беренсе планға туған милләтемдең мәнфәғәтен ҡуйып эш итәм...

*Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы:* Биш баламды үҙебеҙҙең рухта һәм милләтебеҙ өсөн нимәлер эшләй алырлыҡ итеп тәрбиәләп үҫтерҙем, туғыҙ ейән-ейәнсәрҙәремде лә ошо юҫыҡта тәрбиәләйем. Тыумышы менән түгел, булмышы менән башҡорт ейән-ейәнсәрҙәренең өләсәһе һәм ҡартәсәһе булыуымды милләтем өсөн эшләгән иң ҙур хеҙмәтем, тип баһалайым.

Улым һәм ҡыҙҙарым менән башҡорт халҡының аш-һыуҙарын, шул иҫәптән буҙа менән талҡанды күпләп етештереүҙе яйға һалыу буйынса үҙ эшебеҙҙе астыҡ, хәҙер беҙҙән күреп бик күптәр талҡан һәм буҙа етештерә башланы.

Халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың "Тормош һабаҡтары" тигән дәреслегебеҙҙе (И.Д.Бураҡаев, М.Б. Юлмөхәмәтов менән берлектә), милләтебеҙҙең милли идеяһы, тип атауы минең халҡым алдындағы хеҙмәтемә иң оло баһа. Ә бер милләттәшебеҙ "Арғымаҡ" хаҡында: "Өмөтһөҙлеккә бирелгән саҡта йәшәү өмөтө уятыусы китап" - тине. Халҡыма бурыс ҡайтарыуҙы дауам итәм.

*Азамат ТАЖЕТДИНОВ, хеҙмәт ветераны, РФ халыҡ мәғарифы отличнигы:* Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев: "Һәр кем үҙенән һуң бер йәдкәр ҡалдырырға тейеш", - тигән. Мин дә үҙ халҡыма хеҙмәт итерлек өс ул, бер ҡыҙ үҫтереп, уларҙың барыһына ла юғары белем бирҙем. Бөгөн улар тормошта үҙ урынын табып, халҡыбыҙға хеҙмәт итә. Минең халҡыма бурыс итеп ҡайтарырлыҡ иң төп байлығым - балаларым инде.

Бынан тыш, 45 йыл уҡытыусылыҡ эше менән шөғөлләнгән дәүерҙә лә милләтемдең әллә күпме балаһына белем, тәрбиә бирҙем. Мин уҡытҡан уҡыусылар араһында төрлө һөнәр эйәләре, фән докторҙары, кандидаттар, республикабыҙға, милләтебеҙгә хеҙмәт итеүсе абруйлы кешеләр байтаҡ.

Пенсияға сыҡҡас та халҡыма файҙа килтерерлек эштәр башҡарыу теләге ташламаны. Бер япон аҡыл эйәһенең, олоғайған кешенең, беренсенән, һаулығы ныҡ булырға, икенсенән, матди яҡтан азат булырға, өсөнсөнән, ниндәйҙер файҙалы эш менән шөғөлләнергә тейеш, тигән фекере оҡшаны миңә. Файҙалы эш, тигәндә, мин халҡыбыҙҙың ҡанлы ла, данлы ла тарихы, онотолған һәм онотолорға мәжбүр ителгән шәхестәре тураһында китап яҙыуҙы күҙ уңында тоттом. Тәүҙә Бохара мәҙрәсәһендә, унан һуң Сәғүд Ғәрәбстанында уҡып белем алып ҡайтып, яңыса белем биреүсе мәҙрәсә асҡан Байым ишан хаҡында яҙып сыҡтым. Шунан һуң шәхес культы ҡорбаны булған ғалим, шағир һәм тәржемәсе Мөхтәр Байымов хаҡында хеҙмәт яҙҙым. Шулай уҡ шәхес культына дусар булған Шәһәрғәзи сәсән Ғәбдиевтың тормош һәм ижад биографияһын өйрәнеп, уның хаҡында китап баҫтырып сығарҙым. Тарих һәм ундағы күренекле шәхестәребеҙ хаҡында барлығы 6 китап авторымын бөгөн. Һуңғы китабымды Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арнаным. Унда тыуған илебеҙ һәм халҡыбыҙ өсөн батырҙарса һуғышып башын һалған, еңеү менән ҡайтҡан ауылдаштарым хаҡында һүҙ бара. Халҡыма хеҙмәт итеүҙе дауам итәм.

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**яҙып алды.**

ҠАРА ҺИН УНЫ!

# БАР КОММУНИСТАР ҘА...

## Гардановса уйламай

**"Башҡортостан" гәзитенең 172-се һанында БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың Рәсәй партияларының Башҡортостан бүлексәләре етәкселәре менән осрашыуы хаҡында хәбәр баҫылды.**

Ошо осрашыуҙа КПРФ-тың республика комитеты беренсе секретары Рифғәт Гарданов республика мәктәптәренең белем биреү программаһындағы төбәк компоненты беҙҙә әлеге кеүек 30 процент түгел, ә дөйөм Рәсәй нормаһына ярашлы, 5 процент булырға тейеш, тигән фекер әйтте. Шулай итеп, ул төбәк компоненты башҡа фәндәрҙе уҡытыуға зыян килтерә, тип, башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы сыҡты, тиелә гәзиттә. Ҡасандыр (1988-1995 йылдарҙа) республиканың Мәғариф министрлығын етәкләгән был кешенең бөтә коммунистар исеменән ошондай белдереү яһауы оло хафаға һалды. Республика коммунистары етәксеһенең Президент ҡарамағына еткерер башҡа проблемалары (улар етерлек бит) булмағандыр, күрәһең.

Мин башҡортса уҡып (бер мин генә түгел) урта мәктәп тамамланым, унан юғары белем алдым. Башҡорт телендә уҡыу миңә башҡа фәндәрҙе үҙләштерергә зыян итмәне. Хәҙерге заманда юғары уҡыу йортона инергә төбәк компоненты ҡамасауламай, ҡалын кеҫә теләһә ҡайһы юғары уҡыу йортоноң ишеген аса икәнен белмәйме ни Р.Гарданов? Һис булмаһа, шул мәсьәләгә ҡағылышлы берәй һүҙ әйтһә, ҡолаҡҡа ятышлы булыр ине. Тапҡан соҡонор нәмә.

Ошо айҡанлы мин, ярты быуатҡа яҡын коммунистар партияһы ағзаһы һәм ун йыл район мәғариф бүлеге методистары етәксеһе булған кеше, Р.Гардановтың төбәк компонентына ҡағылышлы фекере менән төптө килешмәйем. Реском секретарының фекере бөтә коммунистарҙыҡы түгел, был белдереү партияның абруйын ҡаҡшатыуға йүнәлтелгән аҙым, тип ышаныслы әйтә алам. Ябай коммунистар, төбәк компонентын бөтөрәйек, тигән популистик саҡырыуға мохтаж түгел.

**Алик СӘЙЕТҠОЛОВ,**
**педагогик хеҙмәт ветераны.**
**Күгәрсен районы.**




*Әсәм теле - сәсән теле...*

ИШАРА

# СИҒАНДАР ҠАЛЫР...
## беҙ юҡҡа сығырбыҙмы?

**Бөтә Ер шары буйлап таралған шул сиған халҡы. Өфөбөҙҙә лә күп ине улар. Бер-ике тапҡыр уларҙан алданып, аҡсаһыҙ ҡалғаным да булды. Шулай бер көндө урамдан үтеп барһам, магазин янында тағы ла осраттым бер төркөм сиғандарҙы. Йәш кенә сиған ҡыҙыҡайы минең ҡаршыма килеп: "Давай, я тебе погадаю", - тине. Ә мин ихлас йылмайып: "А у меня в жизни все уже прогадано..." - тип яуап биргәйнем, икәүләшеп көлөштөк. Бүтән көндәрҙә улар эргәһенән үткән саҡта шул сиған ҡыҙы миңә йылмайып, һаулыҡ һорашып ҡала башланы.**

Һуңғы осорҙарҙа сиғандар беҙҙең урамда күренмәй. Ҙур бизнес - "наркотиктар бизнесы" менән шөғөлләнер өсөн, икенсе төбәккә күскәндәр, тигән хәбәр йөрөй. Был ысынмылыр, юҡмылыр...

Шундай парадокс аптырата: бик күп енәйәттәр ҡылған ошо халыҡ тураһында төрлө сериалдар, фильмдар төшөрәләр. Мәҫәлән, "Сиған", "Кармелита". Уларҙы маҡтайҙар, һоҡланалар. Башҡа халыҡтарҙан үҙ йөҙө, үҙ һәләте, үҙ теле менән ныҡ айырылып торған был халыҡты реабилитациялау өсөн шулай эшләйҙәрме икән?

Мин дә ул халыҡтың бер һыҙатына ныҡ көнләшәм: ҡайҙа ғына йәшәмәһендәр, үҙ телендә һөйләшә улар. Үҙ телен белмәгән сиған кешеһенең булыуы мөмкин түгел...

Минеңсә, киләсәктә урыҫ теле сит тел һүҙҙәре менән сүпләнеп бөтһә лә, ҡалыр (75 йыл буйы тырышып өйрәттеләр бит), ләкин урыҫ милләтенән булған кеше ҡалмаҫ; ә беҙҙән "башҡорттар" тигән атамабыҙ ҡалыр, ә телебеҙ юғалыр һымаҡ. Азамат Юлдашбаев яҙғанса ("Шоңҡар", №5, "Моңдарыбыҙ ҡалыр, һүҙҙәре ҡалмаҫ..."): "Ер йөҙөндә "Башҡорт" тип аталған ниндәй моңло милләт йәшәгән икән борон, тип уйланыр киләсәк кешеһе". Шуға табан китеп барабыҙ бит. Хәҙер ауылдарҙа ла йәштәр урыҫ һүҙҙәрен ҡушып һөйләшкән була, имеш "крутойҙар", йәғни "текәләр"... Әле күп гәзит-журналдарҙа башҡорт ҡыҙҙарының сит милләт кешеһенә кейәүгә сығыуын тәнҡитләп яҙалар. Милләттең юғалыуына ҡыҙҙар ғына ғәйепле, имеш. Йә, киреһенсә, сит илдәрҙә йөрөп, күҙҙәре аҡайып ҡайтҡан ҡыҙҙарҙы маҡтайҙар. Үәт, ҡыҙҙар маладистар! Ә ир-егеттәребеҙ ҡайҙа ул? Күбеһе һаман буйҙаҡ, ата-әсәйҙәренең ҡосағында йәшәп ята улар.

Телевизорҙан "В поисках Атлантиды" тип аталған тапшырыуҙар серияһы ҡарайым. Алпамышалай ҡеүәтле халыҡты әллә диңгеҙ, әллә ер йотҡанмы, тип баш вата ғалимдар. Шуның һымаҡ, "Башҡорт нинә бик моңло булған? Йөрәктәрҙе тетрәндерер, күҙҙәрҙән йәштәр ағыҙыр моңға улар нисек эйә булған?" тип баш ватырмы киләсәк ғалимдары?

...Ә сиғандар ҡалыр һымаҡ тойола миңә.

Фәүзиә ЯХИНА.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**"Комсомольская правда" гәзитенең 130-сы һанында /3 сентябрь 2010 йыл/ "Перспективы развития стерлитамакской "Соды" тигән мәҡәләне уҡығас, шунда уҡ бер нисә һорау килеп тыуҙы.**

# ТОРАТАУҘЫ ЕМЕРЕРГӘ БИРМӘБЕҘ!



"Сода" предприятиеһы тәүге продукцияһын 1945 йылда ғына етештерә башлай. Тимәк, иҫ китмәле гигант Шах-Тау бары тик 65 йыл эсендә генә юҡҡа сыҡҡан, Ер йөҙөнән мәңгелеккә юғалған. Уны хәҙер бер ниндәй ысулдар менән дә кире ҡайтарып булмай. Ҡалған шихандарҙың ресурсы ла күп тигәндә 60-70 йылға ғына етәсәк. Етһә әле... Хәҙерге заман тиҙлектәре менән, өҫтәүенә, сит илдәрҙең ихтыяжы һаман арта барғанда, күп тигәндә тағы 30-40 йылдан Стәрлетамаҡ ҡалаһы предприятиеһы тағы ошо уҡ проблема алдына килеп баҫасаҡ. **Ни эшләп ҡала халҡын эш менән тәьмин итеүҙең башҡа ысулдарын эҙләмәҫкә, тигән һорау тыуа.** Ҡала халҡының әлеге быуыны ғына түгел, киләсәге - балалары ла эш урындарына мохтаж буласаҡ бит. Әллә шихандар бөтөү менән ҡаланың һәр төр мохтажлығы ла бөтәсәкме? Балалар беҙҙән аҡыллыраҡ, үҙ көндәрен үҙҙәре күрер, тигән ҡараштамы әлеге вазифалы иптәштәр? Ундай осраҡта балаларыбыҙ, үҙ проблемаларын үҙҙәре заманса хәл иткәндән һуң, ҡайҙа иттегеҙ шихандарҙы, донъя әһәмиәтендәге тәбиғәт һәйкәлдәрен аҡсаға әйләндереп, сит илдәргә осорҙоғоҙмо, тип һорамаҫмы?

1936 йылда был предприятие хаҡында тәүге тәҡдимдәрен индереүсе ғалимдар /иҫән булһалар/ тәбиғәт һәйкәле Шах-тауҙың юҡҡа сығыуына нисек ҡарай икән?

Ниһайәт, беҙ ни өсөн тәбиғәт байлығына фәҡәт матди байлыҡ сығанағы итеп кенә ҡарайбыҙ? Кеше фәҡәт ҡорһаҡ туҡлығы менән генә йәшәмәй, ул башҡа йән эйәләренән рухи ихтыяжы менән айырыла. Фәҡәт матди байлыҡ менән генә йәшәһәк, беҙ тәүтормош заманынан да түбәнерәккә тәгәрәйәсәкбеҙ. Беҙҙе камил рухлы, мәҙәниәтле, әҙәпле Кеше булып йәшәһен өсөн, Юғары көс Ерҙә һәр төрлө матурлыҡ булдырған. Урманы ла, йылғалары ла, сәскәле болондары ла, серле шихандары ла бар уның. Һоҡлан, киләсәк быуының өсөн һаҡла, иҫтәлектәр булып китаптарҙа ғына ҡалмаһын, был донъяла һеҙ генә түгел, киләсәк тә бар, ти беҙгә Тәбиғәт. Юғары көс тарафынан төшөрөлгән был ҡанунды һанға һуҡмайынса, Ишембай районындағы Торатауыбыҙҙы ла емереүгә юл ҡуйһаҡ, ғәфү итмәҫ Хоҙай.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА,
яҙыусы.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**
**18 сентябрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге Ишембай районында Стәрлетамаҡ "Сода" берекмәһенең тәбиғәт ҡомартҡыһы булған Торатауҙы сеймал рәүешендә файҙаланыу буйынса эшмәкәрлегенә ҡаршы сираттағы пикет үткәрә. Йыйылыу урыны Таратау буйында, 12 сәғәттә башлана.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ МИЛЛӘТТӘШЕБЕҘ!

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара.**

**Индекстарыбыҙ:**
**50665 (хаҡы - 330 һум 24 тин),**
**50673 (хаҡы - 360 һум 24 тин).**

**Яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы бүләктәр отошонда ҡатнашыу өсөн редакцияға ебәрегеҙ. Йылдағыса, матур бүләктәр һәм 2011 йылға "Дини календарь" отторасаҡбыҙ.**

### "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

### Тағы бер тәҡдим бар...

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

МӨХӘРРИРИӘТ.




## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда Рәсәй Иҫәп палатаһы рәйесе Сергей Степашин эш сәфәре менән булып китте. Хөкүмәт йортонда ул республика власть органдары һәм федераль власть органының территориаль структура етәкселәре менән осрашты. Унда БР Президенты Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев ҡатнашты. Иҫәп палатаһы рәйесе БР Президенты менән Ауырғазы һәм Ғафури райондарында булды, ундағы эштәр менән танышты.

✓Учалы муниципаль районы Советы ултырышында хакимиәт башлығы итеп Азамат Риза улы Иҙрисов тәғәйенләнгән. Азамат Риза улы быға тиклем "Байрамғол" агрофирмаһы директоры булып эшләгән.

✓Дәүләт һәм муниципаль мәғариф учреждениеларында көндөҙгө формала уҡыған студенттарға, шулай уҡ мәктәп уҡыусыларына 1 сентябрҙән ҡала яны поездарында йөрөү өсөн 50 процент ташлама ҡаралған.

✓ОБСЕ (Организации по безопасности и сотрудничеству в Европе) генеральный секретары Марк Перрен де Бришамбо Наурыз байрамын ОБСЕ-ның Халыҡ-ара байрамы тип иғлан итеү тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйған. Был ҡарар Тажикстан, Әзербайжан, Төркмәнстан, Ҡырғыҙстан һәм ОБСЕ-ға инеүсе башҡа илдәр һорауы буйынса тормошҡа ашырылған. Бынан һуң 21 мартта бөтә донъяла Наурыз байрамы үткәреләсәк.

✓Сибай ҡалаһы үҙенең 55 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Бында әле төрлө спорт саралары үтә. Уларҙың иң әһәмиәтлеһе - милли көрәш буйынса республика турниры, шулай уҡ Советтар Союзы Геройы Таһир Кусимовҡа арналған волейбол ярыштары.

✓"Аҡбуҙат" ипподромында 1812 йылдағы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорт яугирҙәренә арнап "Төньяҡ амурҙары" республика конкурс-смотры башланды. Был шәмбелә тамашасылар конкурста ҡатнашыусыларҙың һыбай йөрөү сәнғәтен тамаша ҡыла аласаҡ.

✓Бөтә Рәсәй Халыҡ иҫәбе кампанияһына арнап, ҡайнар линия асылған. Хәҙер һәр кем 8-800-200-14-25 телефоны аша килеп тыуған һорау буйынса яуап ала ала. Линия шәмбе һәм йәкшәмбенән башҡа көндәрҙә 8-ҙән 21 сәғәткә тиклем яуап бирә.

***✓ Беренсе етәкселәребеҙ был хаҡта ни булһа ла әйттеме? Юҡ. Дөйөм информация сараларының иғтибар үҙәгендә бары тик асыҡ океанға сыҡҡан һәм "Лада-Калина" ла Себер киңлектәрен иңләгән Путин ғына булды.***

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# УТ ҠАПҠАНМЫ ӘЛЛӘ,

## йәки Ни өсөн Путин бер тынала Себерҙе һәм Алыҫ Көнсығышты гиҙеп сыҡты?

**Ял иттем, йәмәғәт, отпускыла булдым. Телевизор ҡараған юҡ, радио тыңламайым, гәзит-журналдар уҡыу хаҡында әйтәһе лә түгел. Машинала бары тик йыр һәм ҡурай моңо ғына яңғырай. Шул саҡ ҡолаҡҡа бер хәбәр килеп инде - Талкаҫ өҫтөнән иҫкән ел килтерҙеме уны, әллә Ирәндек ҡылғаны шыбырланымы, имеш, Путин, һап-һары "Калина"ның руле артында Алыҫ Көнсығыш буйлап сәйәхәт итә.**

Аптырайым. Аңлай алмайым. Путинмы? "Калина"ламы? Руль артындамы? Етмәһә, "Калина"һы һап-һарымы? Аңым етмәй. Күҙ алдына килтереп ҡарайым. Булмай. Ҡабатлап һорайым. Путинмы? Эйе. "Калина"ламы? Эйе. Рулдә үҙеме? Эйе. Үәт замана, үәт донъя: бөйөк дәүләттең (ә Рәсәйҙең бөйөк дәүләт булып ҡалыуына бәрәү ҙә ҡаршы сыҡмайҙыр) бөйөк башлығы (быныһын да инҡар итә алмайһығыҙ) илебеҙҙең икһеҙ-сикһеҙ киңлектәрен үҙ аяҡтары менән иңләй. Почти, үҙ аяҡтары менән. Өҫтән-мөҫтән генә, Президе... (пардон, йәмәғәт, сүтәки, Премьер-министр) самолеты иллюминаторы йәки, "Мерседес"тың кондиционер тарафынан һыуытылған, сифатлы күн менән көпләнгән креслоһында бәүеләбәүеләй, көн төшмәҫлек итеп ҡарайтылған тәҙрәләре аша түгел, ә "Калина"ның үтә күренмәле быялалары аша үҙ күҙҙәре менән, тимәк, инде ун йыл буйына идара иткән илде яҡындан күрҙе булды инде. Илде генәме! Унда йәшәгән халыҡты ла. Күрҙе генә түгел, ишетте лә. Норильск, Тикси, Камчаткалағы Петропавловск, Хабаровск, Чита. Был бит Рәсәйҙең өстән ике өлөшөн тәшкил иткән ерҙәр. Рәсәй Себер менән үҫәсәк, тигән бит бер ғалим. Ә Алыҫ Көнсығыш? Уның киңлектәре сикһеҙ. Тайга буйлап нисәмә көн барһаң да бер кешене лә осратып булмай, тиҙәр ул төбәк хаҡында. Ҡыуаҡ төбө һайын тик ҡытайҙар ғына. Хәйер, бөгөн һүҙ улар хаҡында түгел.

Ваҡытында Себергә һәм Алыҫ Көнсығышҡа иғтибар күп булды һымаҡ. Советтар Союзы етәкселеге был тарафтарға миллиардлаған һум аҡса түкте. Дөрөҫөрәге, күмеп ҡуйҙы. Бында гигант төҙөлөштәр башлап ебәрелде. Уларҙың ҡайһы берҙәре әле һаман булһа ла унышлы ғына эшләп килә, икенселәре хаҡында бер нәмә лә ишетелмәй. Киң билдәлеләрен генә телгә алайыҡ - Байкал-Амур магистрале, Амурҙағы Комсомольск ҡалаһындағы оборона предприятиелары - авиация производство берекмәһе һәм караптар төҙөү заводы, Амур өлкәһендәге Зея гидроэлектростанцияһы, һәм башҡалар, һәм башҡалар. СССР тарҡалғас иһә, Алыҫ Көнсығыш онотолдо тиерлек. Уның хаҡта бары тик урыҫ милли-патриоттары, Ҡытай беҙҙән Алыҫ Көнсығышты баҫып алып бара, тип, ә Япония һәм Көньяҡ Кореянан тотонолған автомобилдәрҙе һатып алыусылар, ул яҡта юл тигән нәмә һәм Рәсәй автомашиналары юҡ, тип кенә иҫкә ала ине. Башҡа берәүгә лә был тарафтар кәрәк булманы. Һәм бына дәүләтебеҙҙең икенсе етәксеһе, Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе үҙе бында юл ярҙы. Ысын мәғәнәһендә, сөнки Путин Алыҫ Көнсығышҡа сәйәхәте сиктәрендә бер ни тиклем юлды автомобилдә - өр-яңы "Лада-Калина Спорт"та үтте. Туҡтаған бер ерендә Путин халыҡ менән осрашты һәм һөйләште. Дөрөҫөрәге, телмәрҙе күберәк Владимир Владимирович тотто. Урындағы халыҡтың проблемаларын хәл иткән арала, ә улар башлыса туҙған торлаҡҡа ҡайтып ҡалды, Путин башҡарған эштәре, киләсәккә пландар хаҡында бәйән итте. Президент һайлауҙары башландымы икән, тип торам хатта. Бындай форматтағы осрашыуҙарҙы һуңғы тапҡыр мәрхүм Борис Николаевич Ельцин ғына үткәргәйне, буғай. Хәтерләйһегеҙме, 1996 йыл, "Тауыш бир, йәки отолаһың!" лозунгы, сәхнәлә йәштәр менән ҡуша ғәйрәтләнеп бейегән Ельцин... Путин әлегә бейемәне. Ул үҙенең көс-ғәйрәтен, ил менән идара итергә көсө етерлеген икенсерәк күрһәтте. Камчатка крайында Владимир Владимирович кәмәлә асыҡ океанға сығып, һоро киттарҙы баҫтырҙы һәм арбалеттан атып, уларҙың бәрәүһенең тиреһенән махсус анализ алды.

Ошо урында мин ябай һалым түләүсе гражданин буларак, һеҙгә, йәмәғәт, бер нисә һорау биргем килә. Әйтегеҙ әле, Премьер-министр асыҡ океанға сыҡмаһа, был эште (һис шикһеҙ, океанда гүмер иткән киттарҙың тормошон өйрәнеү йәһәтенән бик әһәмиәтле һәм кәрәк эште) башҡарырлыҡ бүтән бер кем дә табылманы микән? Ни өсөн Рәсәй кеүек ифрат ҙур дәүләттә Владимир Владимировичтан башҡа быны берәү ҙә атҡара алмай? Ниңә, образлы итеп әйткәндә, бер ҡулында нефть, икенсеһендә газ торбаларын тотоп, Европаны, ә хәҙер тағы ла Ҡытайҙы ағыулыҡ һәм сеймал менән тәьмин итеп торған кешенең ғүмерен ошондай ҡурҡыныс аҫтына ҡуйырға? Океанда ҡапыл шторм башланһа, йәки киттар быларҙың кәмәһен түңкәрһә? Йә булмаһа, тап ошо ваҡытта (ә Путин океанда бер нисә сәғәт булды) берәй дәүләт беҙгә ҡаршы һуғыш асһа? Ғәмүмән, киттарҙы баҫтырыу Премьер-министрҙың эшеме һуң? Океанологтар Мәскәүгә килеп, Путиндың Хөкүмәттәге креслоһына ултырып, дәүләт менән идара итеп маташмай ҙа баһа? Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡ: Владимир Владимирович Путиндың, Рәсәй Хөкүмәтенең Премьер-министры булараҡ, бер эш сәғәте күпме тора икән? Беҙҙең өсөн, һалым түләүселәр өсөн, тимәксемен? Әгәр ҙә инде киттарҙы өйрәнеү менән шөғөлләнгән ғалимдар Путиндың ярҙамыһыҙ булдыра алмай икән, ни бысағыма уларҙы финансларға?

Йә ярай, киттар тураһында етеп торор. Һары "Лада-Калина" хаҡында бер нисә һүҙ. Етәксенең руль артына ултырыуы, автомобиль менән үҙе идара итеүе - бик мәслихәт күренеш. Тимәк, ул ил менән дә шулай уҡ оҫта идара итә. Бер үк ваҡытта Путиндың яңы ғына төҙөлгән "Амур" автомагистрален ҡарап тикшереп барыуы ла маҡтауға ғына лайыҡ. Ә инде йөрөп ҡараған һуң "Лада" автомобилен етештереүселәргә үҙенең тәьсораттарын еткереп, тегеләре дәүләт башлығының тәҡдимдәрен алып, ысынлап та Премьер-министр йөрөтөрлөк автомобиль етештерә башлаһа, бигерәк тә шәп булыр ине. Асылда иһә Владимир Владимирович реклама сюжетында ҡатнашҡан "йондоҙ" кеүегерәк ҡыланды. Шәп машина, тауышы ла бигүк ишетелмәй, тип ыҫкындырҙы ул "Лада-Калина" тураһында. Уның ошо һүҙҙәренән һуң Рәсәй автомобиль етештереүселәре һәм һатыусылары "Лада"ға хаҡтарҙы күтәреп ебәрһә, бер ҙә ғәжәп түгел. Премьерҙың һүҙе алтынға бәрәбәр. Шуныһы ҡыҙыҡ, йәмәғәт, Путин трасса буйлап яңғыҙы бармаған бит инде - уны һаҡсылар, журналистар, Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре, башҡа рәсми кешеләр оҙатып барған. Улар, Путиндан айырмалы рәүештә, сит ил автопромы етештергән автомобилдәрҙе генә һайлаған. Оҙатып барыусылар араһында Японияла етештерелгән Toyota Land Cruiser 200 һәм Toyota Land Cruiser 100, шулай уҡ Германия микроавтобусы Volkswagen Transporter булған. Ә Путин алдынан һәм артынан йөрөүсе автоинспекторҙар иһә бары тик Ford Focusты ғына үҙ итә, имеш.

Путиндың сәйәхәтенең маҡсаттарына килгәндә инде, тағы ла бер нәмә хаҡында әйтеп үтмәй булмай. Август-сентябрь айҙары Путин өсөн айыруыса фажиғәле мәлдәр. Ул Рәсәй Президенты булған осор эсендә йыл һайын тиерлек был айҙарҙа ниндәй ҙә булһа йән тетрәткес, ҡорбандар менән бәйле ваҡиғалар булып торҙо. "Курск" һыу аҫты кәмәһенең батыуы һәм Беслан мәктәбен террорсылар баҫып алыуы айырыуса фажиғәле. Быйыл һеҙ ошо ике ваҡиға хаҡында рәсми сығанаҡтарҙан һәм матбуғат сараларынан ниндәй ҙә булһа хәбәр ишеттегеҙме? Дәүләт кимәлендә хәтер саралары булып үттеме? Беренсе етәкселәребеҙ был хаҡта ни булһа ла әйттеме? Юҡ. Дөйөм информация сараларының иғтибар үҙәгендә бары тик асыҡ океанға сыҡҡан һәм "Лада-Калина" ла Себер киңлектәрен иңләгән Путин ғына булды. 1 сентябрь көнө, мәҫәлән, Путин Себер федераль университетында булды. Ул студенттар менән мамонттарҙың ҡырылыуы, Йыһандың барлыҡҡа килеүе, стипендиялар һәм студент ятаҡтары хаҡында һөйләште. Һәр хәлдә, Үҙәк телевидениенан тапшырылған яңылыҡтарҙа башҡа бер ниндәй ҙә хәбәр булманы. Был нимә - президент осорондағы фажиғәле ваҡиғаларҙы онотоорға, онотторорға маташыумы?

Һәм һуңғыһы - тап ошо мәлдә Рәсәйҙең көнбайыштағы өлкәләрендә ҡупкан ҡот осҡос янғындар тотош ауылдарҙы ер йөҙөнән юҡҡа сығарҙы, халыҡ йорт-ҡураһыҙ, мал-тыуарһыҙ, кейем-һалымһыҙ урамда тороп ҡалды. Утта һәләк булғандарҙың һаны көндән-көн артты ғына. Владимир Владимирович та янғын һүндереүҙә ҡатнашманы түгел, ҡатнашты. Махсус самолет штурвалы артында ултырып, янған урманға һыу һиптерҙе. Янғындан айырыуса ныҡ зыян күргән төбәктәрҙә булды, халыҡ менән осрашты, яңы йорттар төҙөп бирергә вәғәҙә итте. Хатта төҙөлөштәрҙең барышын видеокамералар ярҙамында үҙе күҙәтергә һүҙ бирҙе. Һәм... Алыҫ Көнсығышҡа осто. Үҙе менән журналистарҙы эйәртеп, үҙенә дөйөм информация сараларының иғтибарын йәлеп итеп... Һуғыш ваҡытында радист-корректировщиктар, бөтә яҡтан дошман ҡамап алған хәлдә тоҫҡаусыларға үҙенең координаттарын биргән. Шулай итеп, артиллерия утын үҙенә яуҙырған. Һәләк булһалар ҙа, улар үҙ ғүмере хаҡы менән дошмандарҙы юҡ итеүгә булышлыҡ иткән. Премьер-министрыбыҙ иһә, киреһенсә, ут солғап алған көнбайыш Рәсәйҙән салғыйына ут ҡапҡан кеүек көнсығышҡа табан йүнәлде. Быйылғы янғын ныҡ ҡына ялмаған рейтингын ҡабат үҫтереп алыу өсөндөр инде, моғайын.



**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфө дәүләт нефть техник университеты илдең техник вуздары рейтингында дүртенсе урында килә. Ә Өфө дәүләт авиация техник университеты был исемлектә һигеҙенсе урында. Рейтинг уҡырға инеүселәрҙең Берҙәм дәүләт имтиханы буйынса уртаса балдары нигеҙендә төҙөлгән. Әммә был күрһәткестәр уҡыу йорттарының дөйөм рейтингында юғары баҫҡыс яулау мөмкинлеге бирмәгән. Был исемлектә Өфө дәүләт нефть техник университеты - 32-се, Өфө дәүләт авиация техник университеты 58-се урында. Ә Башҡорт дәүләт университеты 79-сы урында.

✓Рәсәйҙең иң эре ҡалаларында торлаҡҡа хаҡтар кимәле сағыштырып өйрәнелгән. Өфөлә торлаҡтың 1 кв. метры уртаса 42500 һум тора һәм ул Рәсәйҙең эре ҡалалары исемлегендә 13-сө урында тора. "Эксперт" агентлығы хәбәр итеүенсә, быйыл һигеҙ айҙа Өфөлә торлаҡ хаҡтары 9 процентҡа үҫкән. Хаҡтар артыу Хабаровскиҙа - 19,8, Владивостокта - 18,9, Мәскәүҙә 18,3 процент тәшкил иткән.

✓"Ҡашҡаҙан" мәҙәни һәм ял паркы хакимиәте һыу аҫтындағы үҫемлектәрҙе таҙартыусы яңы ҡоролма һатып алды. Ҡашҡаҙан күлен ылымыҡ һәм ҡамыштарҙан таҙартыу бында бик ҙур проблема тыуҙыра ине. Быйылғы эҫелек был проблеманы тағы ла ҡатмарлаштырҙы. Хәҙер иһә яңы ҡоролма күлде даими таҙартып тороу мөмкинлеге бирәсәк.

✓Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Йәштәргә - эш!" акцияһы булып үтте. Бындай сара даими үткәрелә килә. Был юлы йәрминкәлә 70 эш биреүсе предприятие ҡатнашты. Менеджерҙар, бухгалтер, маркетолог, сауҙа вәкилдәре, ЭВМ операторҙары, промоутерҙар, водителдәр, кондукторҙар, һатыусылар, социаль хеҙмәткәрҙәр, тәрбиәселәр - был күп предприятиеларға талап ителгән вакансияларҙың тулы булмаған исемлеге. Был юлы акцияға эш биреүселәрҙән тыш, сығарылыш уҡыусыларын яңынан әҙерләү менән шөғөлләнгән уҡыу йорттарын да саҡырғайнылар.

✓Башҡорт дәүләт филармонияһының йәш йырсыһы Марсель Ҡотоев эстрада йырсыларының "Көнсығыш баҙары -2010" тип аталған VI халыҡ-ара телевизион конкурсында ҡатнашып, финалға сыҡты һәм гала-концертта сығыш яһаны. Был юлы конкурс Ҡара диңгеҙ буйында Ялтала үтте.

ХОККЕЙ

# ПРЕЗИДЕНТ ҠУЛЫ ЕҢЕЛ БУЛДЫ

**Башҡортостан Республикаһы Президенты кубогына Халыҡ-ара хоккей турниры мауыҡтырғыс спорт байрамына әйләнде. Көйәрмәндәр өс көн буйы барған көсөргәнешле ярыштарҙы рәхәтләнеп ҡараны, юлаевсыларҙың оста уйынына һоҡланып бөтә алманы, ҡыуанѣслы хистәр күкрәктәргә һыйманы.**

"Салауат Юлаев" беренсе көндә Ханты-Мансиҙың "Югра" командаһын 4:3 иҫәбе менән еңде. Дөрөҫ, иҫәп айырмаһы ҙур түгел, әммә еңеү еңеү инде ул. Икенсе көндә юлаевсылар Силәбе ҡалаһының "Трактор" командаһы менән көс һынашты. Хәйер, көс һынашты, тип ауыҙ күтәреп әйтеү дөрөҫлөккә тап килмәй. Уйын кимәле бер тиң булғандар ғына көс һынаша. Ә был юлы "Салауат Юлаев" "Трактор" командаһын пыр туҙҙырып, ҡоро иҫәп (4:0) менән тар-мар итте. Силәбе хоккейсыларының Өфө майҙанында ҡоро иҫәп менән еңелгәне юҡ ине әле.

Карловы Вары ҡалаһының (Чехия) "Энергия" хоккейсыларын 7:1 иҫәбе менән еңде. "Энергия" менән уйнағанда юлаевсылар тантана итте.

Шулай итеп "Салауат Юлаев" Президент кубогын яуланы. Былтыр президент кубогы ситкә: Словакияға киткәйне. Хәҙер кубок Өфөлә ҡалды. Президент Рөстәм Хәмитов уны үҙ ҡулдары менән юлаевсылар капитаны Виталий Прошкинға тотторҙо.

* * *

**Континент хоккей лигаһы чемпионатын "Салауат Юлаев" командаһы бик уңышлы башланы. Ул күптәнге танышы - Силәбе ҡалаһының "Трактор" хоккейсыларын үҙ майҙанында ҡабул итте һәм уны 7:2 иҫәбе менән тар-мар итте.**

Юлаевсылар уйын дилбегәһен баштан уҡ үҙ ҡулына алды һәм осрашыу бөткәнсе ҡулдан ысҡындырманы. Беренсе осорҙа Владимир Антипов тәүге шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына сәпәне. Икенсе осор юлаевсыларҙың тулы өҫтөнлөгө менән үтте. Патрик Торесен осор башланыу менән үк тракторсылар ҡапҡаһы артында ҡыҙыл ут тоҡандырҙы. Юлаевсылар сафына яңы ғына килгән Роберт Нильсон - өсөнсө, ә Олег Сапрыкин дүртенсе шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына индерҙе. Хәҙер иҫәп 4:0 булды. Өсөнсө осорҙа һаҡсы Андрей Кутейкин һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡасыһы тота алмай ҡалды.

"Трактор" командаһы иҫәп 5:0 булғас ҡына майҙан хужалары ҡапҡаһын аса алды. Иҫәп 5:1 булды. Юлаевсылар бынан һуң йәнә ике шайбаны ҡаршы яҡ ҡапҡаға оҙатты. Уйын тамамланыр алдынан ғына Петр Вампула юлаевсылар ҡапҡаһына икенсе шайбаны индерҙе.

Юлаевсылар ҡунаҡтарҙы ҙур иҫәп менән ҡыйратты. "Салауат Юлаев" хәҙер 13 сентябрҙә Магнитогорскиҙың "Металлург" командаһы менән көс һынашасаҡ.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Үткән аҙна баш ҡаланың ике майҙанында бал йәрминкәһе үтте. Өфө тормошонда күркәм йолаға әйерелгән был сараға йыл да республиканың төрлө тарафтарынан килгән умартасылар баш ҡала халҡына татлы аҙыҡтың төрлө сорттарын тәҡдим итә.**

# БАЛ ЙӘРМИНКӘЛӘРЕ...

## ҡала халҡын бал ашарға өйрәтте

Бал йәрминкәһендә ҡатнашырға теләүсе умартасыларҙың йылдан-йыл күбәйә барыуын иҫәпкә алғанда, бер аҙ онотола төшкән боронғо был шөғөл бөгөн үҙ көнөн үҙе күреп йәшәргә тырышыусы уңғандар араһында киң популярлыҡ яулай бара, тип әйтергә мөмкин. Мәҫәлән, Йәштәр һарайы алдындағы майҙанда үткән йәрминкәлә республиканың 46 районынан умартасылар ҡатнашты. Улар араһында бал ҡорто менән 25-30 йыллап шөғөлләнеүселәр күберәк ине. Миәкә районы Ҡолтай-Ҡаран ауылынан килгән Рәсим Ғилмитдиновҡа был кәсеп, мәҫәлән, ҡартатаһынан мираҫ булып ҡалған. Элегерәк бал ҡорттарын күнел өсөн генә тотһа, күмәк хужалыҡтар юҡҡа сыҡҡас, был шөғөл яҡшы ғына табыш алыу ысулы ла булып китә.

Ишембай районының милли мәҙәниәт үҙәге етәксеһе Кинйә Әхмәҙиев әйтеүенсә, умартасылыҡ менән шөғөлләнеүселәр районның һәр ауылында ла бар. Иң "баллы" райондарҙың береһе булған Ишембай йәрминкәлә үҙенең тирмәһен дә ҡорғайны. Данлы умартасылары менән дә билдәле был район. Былтыр республика умартасылар конкурсында Илгиз Шәңгәрәев беренсе урын алһа, быйыл районда уҙған был бәйгелә уның ҡыҙы Гөлназ балалар араһында еңеүсе булыуға өлгәшкән.

Бер кәсептең икенсеһен тергеҙеүгә булышлыҡ итеүенә лә шаһит булынды йәрминкәлә. Мәҫәлән, балды боронғоса, ағас батманда тотоу уның тәмен үҙгәртмәй, тип, күптәр ағас һауыттарға өҫтөнлөк бирә башлаған. Бал тәпәндәре йүкәнән яһала, йүкә балдың артыҡ һыуын үҙенә һеңдерә һәм ризыҡтың сифаты тағы яҡшыра икән. Ағас батмандар, умартасылыҡ өсөн кәрәкле эш ҡоралдары, умарта рамдары, умартаны урындағы осталар етештерә һәм, әлбиттә, әҙме-күпме булһа ла килем ала. Баҡалы районынан Анатолий Юлдыкаев хатта сувенир продукцияһы етештереп, баҙарға сығарырға йөрьәт иткән. Гаражын мастерскойға әйләндереп, ҡатыны, улы менән киленен йәлеп итеп, балды төрлө ҙурлыҡтағы ағас, бяла һауыттарға тултырып, матурлап төрөп һата ул. Дәртем бар ҙа, дарманым юҡ, эшләр инем, эш юҡ, тип ултырыр замандарҙың артта ҡалыуына ишара, тип тә ҡабул итергә булалыр быларҙың барыһын да.

Йыл ҡоро килеү сәбәпле, бал уңышы былтырғы йыл менән сағыштырғанда күпкә ҡайтышыраҡ, шулай ҙа хафаланырға урын юҡ, ти умартасылар. Бал аҙыраҡ булғас, быйыл уның хаҡы ҡимметерәк тә. Төрлө урында уның килограмын 350-450 һумға һатып алырға мөмкин ине. Солоҡ балының килограмы 1500-2000 тирәһе торҙо. Өфөлә йәшәүсе пенсионер Кәүсәр ағай Сәрүәровтың "Бал ғүмерҙе оҙайта, тәнде лә, кесәне лә таҙарта", тип шаяртыуында дөрөҫлөк тә бар һымаҡ, шулай ҙа былай ҙа тир түгеп тапҡан хәләл малын осhоҙға һатырға күнеккән ауыл халҡының аҡса эшләп ҡалырға тырышыуын да аңларға кәрәк.

Хаҡ тигәндәй, халыҡ шулай ҙа балдың хаҡына ҡарағанда, сифатына өҫтөнлөк бирә һәм экологик яҡтан таҙа һаналған райондарҙың тауарын сират тороп ала. Мәләүез, Күгәрсен, Белорет, Бөрйән ҡурсаулыҡтары балы үтемлерәк булды йәрминкәлә. Сифаты яғынан шәхси умартасылыҡтарҙың балы ҡайтыш та түгелдер, әммә ҡурсаулыҡтар халыҡты үҙенә йәлеп итерлек реклама яһай белде. Бөрйән районының Ырғыҙлы урмансылығы етәксеһе Салауат Зарипов та, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы директоры Михаил Косарев та рекламаның сауҙа өсөн бик мөһим икәнлеген билдәләне. Әйткәндәй, "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы 18-19 сентябрҙә солоҡсолар араһында конкурс үткәрергә йыйына һәм унда ҡатнашырға теләүселәрҙе "Шүлгәнташ ҡурсаулығы дуҫтары" тигән фестивалгә саҡырып ҡала.

Шуныһы ҡыҙыҡ: һатып алыусылар араһында бал һайлай белеүселәр юҡ кимәләндә булып сыҡты. Ундайҙарға Нуриман районы умартасыһы Флүзә апай Юлдашеванан бер нисә кәңәш: бал батманына ҡалаҡ тығып ҡарағыҙ, бер ниндәй ҡатнашмаһы булмаған бал өҙөлмәй аға. Икмәктең йомшағын балға батырһаң, ул ҡатырға тейеш, әгәр ҙә икмәк мәжеп төшә икән, бал таҙа түгел. Бал һалынған банканы аҫтын өҫкә әйләндереп ҡарарға ла мөмкин: әгәр балдың эсендә ҡыуыҡ барлыҡҡа килһә, бал яҡшы сифатлы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Организм өсөн балдан да файҙалыраҡ аҙыҡ юҡ, дарыуханаға дарыу артынан йөрөмәҫ өсөн көн һайын бал ашарға кәрәк. Бөтөн донъя маҡтай-маҡтай башҡорт балын һатып алырға тырышҡан саҡта, үҙебеҙҙең халыҡты бал ҡулланырға өйрәтеп булмай әле", - тигәйне Ишембай районы Байғужа ауылы умартасыһы Салауат Арыҫланов. Шулай ҙа ошондай йәрминкәләр ойоштороla башлағандан алып баш ҡалала ла бал ҡулланыусылар һаны артҡандыр, тип ышанғы килә. Өфөлә октябрь аҙаҡтарына тиклем дауам итәсәк йәшелсә йәрминкәләрендә лә бал һатып алып буласаҡ әле. Шуға, кем өлгөрмәгән, һәр шәмбе һәм йәкшәмбе ҡала майҙандарына ауыл хужалыҡ тауарҙары һатылған йәрминкәләргә рәхим итегеҙ!**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**



Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Бөгөн Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Ураҙа байрамына арнап, хәләл аҙыҡтар йәрминкәһе үтә. Сара иртәнге 10-дан башлана. 18 сәғәттән концерт программаһы буласаҡ.

✓"Һылыуҡай" студияһына йөрөргә теләүсе ҡыҙҙар өсөн "Асыҡ ишектәр көнө" үткәрелә. Унда студия етәкселеге һәм уҡытыусылары, тәрбиәләнеүселәре менән осрашырға мөмкин буласаҡ. Һәм тағы ла бер яңылыҡ: быйыл студияла беренсе тапҡыр балалар төркөмө (7 йәштән) тупланасаҡ! Өфө ҡалаһы, Кустарная, 17 ("Витамин заводы" туҡталышы) адресы буйынса гүзәллек һәм сәхнә остаlығы мәктәбенә рәхим итегеҙ. Белешмәләр өсөн телефондар:
294-04-99; 8-919-146-20-08.

✓Өфөлә картуфҡа хаҡтар күтәрелә бара. Уның хаҡы күтәрелеүенә, республикала картуф унманы, тигән хәбәр таратыусылар сәбәпсе, тине баш ҡала хакимиәте башлығы Павел Качкаев оператив кәңәшмә ваҡытында. Әммә борсолорға урын юҡ, тип белдерҙе Павел Рюрикович. Республикала картуф уңышы элеккегә ҡарағанда кәмерәк булһа ла, күрше өлкәләрҙә уңыш юғары һәм уларҙан һатып алған картуф хаҡы ла ул ҡәҙәре юғары булмаясаҡ.

✓10 сентябрҙән 10 октябргә тиклем Өфөлә санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү айлығы үтәсәк. Дөйөм ҡала субботнигы 25 сентябргә тәғәйенләнгән.

✓Өфө юлдарында асфальт түшәменең яңы технологияһы ҡулланыла башланы. Был асфальт айырыуса ныҡлыҡ, һыуға бирешмәүсәнлек менән айырыла, оҙаҡҡа сыҙаясаҡ. Ошондай материал "Госцирк" менән "Р. Ғарипов исемендәге мәктәп-интернат" туҡталыштары араһындағы, Дуҫлыҡ монументы янындағы юлдарҙа ҡулланылды.

✓Өфө әсәйҙәре араһында матурлыҡ конкурсы старт алды. Конкурсты ойоштороусылар - хакимиәт сайты Mnogomamok.ru хәбәр итеүенсә, унда балалары булған 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнаша ала. Сара ике турҙа - 7 сентябрҙән 7 октябргә тиклем виртуаль тур, ә 11 октябрҙә иһә финал буласаҡ. Тулыраҡ мәғлүмәтте www.konkurs.mnogomamok.ru сайтында алырға була.

ҺОРАУ-ЯУАП

# МИЛЛӘТТЕ БИЛДӘЛӘҮСЕ...

## берҙән-бер мөмкинлек




**Оҙаҡламай сираттағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу сараһы үткәреләсәк. Билдәләнгән дата яҡынлашҡан һайын, халыҡты төрлө һорауҙар борсоуы асыҡлана. Һорауҙарҙың ҡайһы берҙәренә яуап биреүҙе үҙ бурысыбыҙ тип һананыҡ.**

➔ **Әгәр кеше бер урында теркәлеп, икенсе урында йәшәһә, ул иҫәп алыуҙы ҡайҙа үтергә тейеш?**

Иҫәп алыу теркәлеү буйынса түгел, ә даими йәшәгән урын буйынса үткәрелә. Иҫәп алыусылар бер ниндәй документ талап итмәй. Ә кеше даими йәшәгән урын тип уның кискетөнгө ялын күберәк үткәргән урын һанала. Уның теркәлеү адресы менән тап килмәүе лә ихтимал.

➔ **Ял йорттарында йәки шифаханаларҙа булыусылар иҫәп алыуҙы нисек үтә?**

Әгәр даими йәшәгән урынында улар тураһында иҫәп алыусыға мәғлүмәт бирә алырлыҡ кешеләр булһа, уларҙы, ваҡытлыса өйҙә юҡ, тигән билдә менән теркәйәсәктәр. Әгәр ҙә өйҙә мәғлүмәт бирерлек кеше булмаһа, иҫәп алыу уҙғарылған ваҡытта йәшәгән урынындағы стационар иҫәп алыу участкаһында теркәлеү үтә ала.

➔ **Саҡырыу буйынса хәрби хеҙмәттә булыусылар иҫәп алыуҙа ҡатнашамы?**

Әрмелә булыусылар иҫәп алыуҙы башҡарма властың тейешле органы тарафынан үтә.

➔ **Иҫәп алыуҙы телефон йәки Интернет аша үтеп буламы?**

Айырым осраҡтарҙа - мөмкин. Мәҫәлән, оло йәштәге йәки ауырыу кешеләр. Улар үҙҙәре стационар участкаға бара алмаһа, ә иҫәп алыусыны өйөнә индереүҙән баш тартһа, телефон аша ғына яуап бирә ала. Интернет аша теркәлеү "Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу тураһында"ғы Законда ҡаралмаған.

➔ **Иҫәп алыусы килеп тә, мин өйҙә булмаһам, ул ҡабаттан киләсәкме?**

Бындай осраҡтар булғанда, иҫәп алыусы ҡабат киләсәк, унда ла һеҙҙе тап итә алмаһа, стационар йәки инструктор участкаһының адресын, телефонын яҙып, унда барып иҫәп алыуҙа ҡатнашыуығыҙҙы һорап хат ҡалдырасаҡ.

➔ **Әгәр мин стационар участкала йәки телефон аша иҫәп алыу үтһәм, был турала минең фатирыма килеүсе иҫәп алыусы ҡайҙан белһен?**

Телефон аша йәки стационар участкала иҫәп алыу үтһәгеҙ, был хаҡта иҫәп алыусыға әйтегеҙ. Ул иҫәп алыу ҡағыҙҙарын тикшерәсәк.

➔ **Өйҙә йәки фатирҙа йәшәүселәр өсөн бер кеше генә яуап бирә аламы?**

Әгәр тулы һәм аныҡ мәғлүмәт белһәгеҙ, мөмкин. Белмәйһегеҙ икән, иҫәп алыусы улар өйҙә булғанда тағы ла киләсәк.

➔ **Иҫәп алыу ҡағыҙҙарына милләт тураһында һорау индерелгәнме?**

Эйе, сөнки халыҡ иҫәбен алыу милли составты билдәләүҙең берҙән-бер сығанағы булып тора. Мәғлүмәт кешенең һүҙенән яҙылғанлыҡтан, ул кеше үҙен ниндәй милләт вәкиле итеп тоя, шул милләт яҙыласаҡ.

➔ **Милләт тураһындағы графаны яуап биреүсе үҙ ҡулдары менән генә тултыра ала, тиҙәр?**

Элек шулай ине, быйыл июлдә законға индерелгән төҙәтеүҙәр иҫәп алыусыға ла был графаны тултырыу хоҡуғын бирә. Мәҫәлән, яуап биреүсенең ҡулы ауыртып, яҙа алмағанда, иҫәп алыусы уның һүҙҙәренән сығып, графаны үҙе тултыра ала.

➔ **Иҫәп алыуҙа нисә йәштән ҡатнашырға була?**

Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу йәшкә ҡарамай, унда илдәге бөтөн халыҡ та ҡатнаша. Әммә 14 йәштән кеше иҫәп алыусының һорауҙарына яуапты үҙе бирә ала, ә инде балиғ булмағандар өсөн ата-әсәләре яуап бирә.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# САРАЛА ҠАТНАШЫП...

## мин үҙемдең барлығымды белдерәм

**ҺОРАУ: Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһында һеҙҙең өсөн иң әһәмиәтлеһе нимә?**

**Наилә ӘХМӘҘИЕВА, журналист, 27 йәш:** Уҙған халыҡ иҫәбен алыу кампанияһында теркәүсе булараҡ ҡатнашҡайным. Был сараның киләсәк өсөн ни тиклем мөһим икәнлеген шунда һыҙлап аңланым. Һәр халыҡ, һәр бер кеше иң тәү сиратта үҙе һәм үҙе йәшәгән төбәк тураһында мәғлүмәтле булырға тейеш. Кем ул? Нимәгә эйә? Социаль, профессиональ, сәйәси, белем һәм рухи йәһәттән нимә етмәй? Етмәгәнде булдырыу өсөн ни эшләргә кәрәк? Теге йәки был проблемаларҙың асылын, сәбәптәрен белмәй тороп, уны хәл итеүе ауыр, донъяңды алға ебәреү ҙә еңел түгел. Шулай итеп, иҫәп алыу кампанияһы - ул ҡоро иҫәп менән генә сикләнмәгән оло бер сәйәсәт. Ул беҙҙең кәмселектәребеҙ менән көрәшергә ярҙам итергә тейеш...

**Артур ҠАҺИРОВ, студент, 20 йәш:** Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһында минең бурысым - халҡыбыҙ һанын бер кешегә булһа ла арттырыу. Глобалләшеү процесы әүҙемләшкән был осорҙа халҡым тулыһынса юғалып ҡалмаһын, Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы кеүек сараларҙа уның күләме яһалма рәүештә кәм итеп күрһәтелмәһен ине, тип көтәм. Сөнки бындай миҫалдар булды бит.

**Ләйлә ХАНОВА, уҡытыусы, 24 йәш:** Был саранан һуң ил халҡының социаль, иҡтисади хәле буйынса ниндәйҙер һығымталар яһалып, ниндәйҙер алға китеш булырға тейеш, тип иҫәпләйем мин. Ҡыҙғаныска ҡаршы, быға тиклем үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу кампанияларынан һуң йәшәйешебеҙҙә әллә ни ҙур үҙгәрештәр һиҙелмәне. Бәлки, ошо сираттағы халыҡ иҫәбен алғандан һуң тормош яҡшы яҡҡа үҙгәрер...

**Рәзиә САФИНА, уҡытыусы, 27 йәш:** Бөтә Рәсәй Халыҡ иҫәбен алыуҙың иң төп әһәмиәте, минеңсә, республикабыҙ халыҡтарҙың иҫәбен белеү. Был кампанияла милли мәсьәлә - иң мөһиме. Республикаға исем биреүсе халыҡтың артыуы мөһим минең өсөн. Милләттәштәр ҡатнаш никах ҡороп, башҡа милләттәргә балалар үҫтереп, башҡа милләткә күсеп, тамырыбыҙға балта саба икәнен аңлай башлаһын, сәме уянһын өсөн дә кәрәк бындай сара.

**Рәфил СӘЙЕТҒӘЛИЕВ, 23 йәш, шәхси эшҡыуар:** Хәҙерге заманда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыуҙар XVII-XVIII быуаттарҙағы "ревизиялар"ҙан шуныһы менән айырыла: хәҙерге сара һалым күләмен билдәләүҙе генә маҡсат итеп ҡуймай, ә аҙ һанлы милләттәрҙе асыҡлап, уларға ниндәйҙер йәшәү сәме лә бирә. Тарихтан ата-бабаларыбыҙҙың халыҡтың һанын йәшереп тотҡанлығы билдәле. Сөнки ул ваҡыттарҙа һалымдар бик ауыр булған. Бөгөн кемдәлер кемдәндер йәшереүҙең кәрәге юҡ. Хәл башҡасараҡ: үҙебеҙҙең барлығыбыҙ тураһында бар донъяға белдерергә тейешбеҙ. Ә кем дә кем был саранан ситтә ҡалырға уйлай, был уның рухһыҙлығын, манҡортлоғон фашлаусы билдә.

**Закирйән ӘМИНЕВ, ғилми хеҙмәткәр:** Халыҡ иҫәбен алыу сараһынан һуң халыҡтың үҙен-үҙе тойоуы ла үҙгәрә. Уның милләттәр аренаһында тотҡан урыны ла аныҡлараҡ күренә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, был сараны яһалма рәүештә контролдә торорға маташыу беҙҙең өсөн ыңғай һөҙөмтә бирмәй. Иҫәпләүҙәр объектив һандарға ҡоролһа ғына, кампанияның маҡсаты үтәләсәк. Шундай бер миҫал: 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу барышында татарҙарҙы башҡорт тип яҙҙыралар, тип, ҡайһы берәүҙәр тауыш күтәреп, Мәскәүгә партия органдарына ялыу яҙҙы. Шунан һуң башҡорт халҡы яһалма рәүештә кәметелде. Халыҡтың һаны артыуы тураһында райондарҙан хисапламалар килеп торһа ла, иҫәп алыу материалдарында милләт һаны аҙая тип теркәлде. Бына шундай парадоксттар ҡабатланмаһын берүк.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

## Аяҡ-ҡул ойоуы



Бер литр эремсек һыуын йылытырға (кистән үк). Ул һыу ни тиклем әсерәк булһа, файҙаһы ла шул тиклем күберәк. Йоҡлар алдынан эремсек һыуын таҫҡа ҡойорға, шуның боҫонда аяҡ-ҡулдарҙы 5 минут торорға, һыуынһа, алдан әҙерләнгән ҡайнар һыуҙы өҫтәп торорға. Аяҡ-ҡулды һөртмәйенсә генә, үҙ йыйында киптерергә. Ә иртәнсәк уларҙы йыуып, массаж яһарға. Массаждан һуң бер таҫҡа эҫе, икенсеһенә һалҡын һыу һалып, аяҡ табанын, ус төптәрен алмашлап эҫе һәм һыуыҡ һыуға тығып алырға. Быны көмендә 5-7 минут эшләргә. Аҙаҡтан ҡоротоп, камфара майы һөртергә һәм таҙа ойоҡ кейергә. Кис тағы процедураны ҡабатларға.

## Быуындар һыҙлаһа

Был мәлдә бармаҡтар ныҡ ауырта. Унан ҡотолоу өсөн йөн бейәләйҙәрҙе тоҙло һыуҙа сылатып (1 стакан һыуға 1 ҡалаҡ тоҙ), ярты сәғәткә ултыртырға, унан һығып алырға һәм киптерергә. Йоҡлар алдынан бейәләйҙәрҙе ҡулға кейеп ятырға. Бил ауыртһа ла ниндәй ҙә булһа йөн туҡыманы тоҙло һыуҙа сылатып, киптереп, билгә бәйләп йөрөгөҙ.

## Һыуыҡ ныҡ тейгәндә

Ярты литр ҡайнаған һөткә ике ҡалаҡ ирателгән һарыҡ майы, бер ҡалаҡ бал, бер ҡалаҡ аҡ май ҡушырға һәм көнөнә бер үк күләмдә өс тапҡыр эсергә. Унан һуң бик яҡшылап тирләргә, ә түш һәм арҡаны, табандарҙы ҡаҙ майы менән һыларға кәрәк. Борон үпкә сирен дә ошолай дауалағандар.

## Ҡара көртмәлә

Был емештә марганец һәм органик кислота күп. Уны гастриттан, быуындар һыҙлауынан, тире ауырыуҙарынан, бөйөргә таш ултырғанда ашарға, япрағын сәй итеп эсергә була. Өҫтәүенә, ҡара көртмәле күреү һәләтен дә яҡшырта, ҡандағы шәкәрҙе кәмәтә, йоғошло сир микробтарын үлтерә.

## Әрекмән

Әрекмән (лопух) тамырын 5-10 минут әкрен утта 0,4 литр һыуҙа ҡайнатҡанда мәтрүшкә, кейәү үләне ҡушаһың. 2-3 сәғәт төнәтәһең. Ас көйөнсә йәки ашағас, 2-3 сәғәттән һуң эсәһең. Һыҙланыуҙарҙан да, яман шештән дә һаҡлай, ярҙамы тейә.




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Тейешле сара

● Исраф иң хөрмәтле ғаиләләрҙе лә боҙа, иң бай өйҙәрҙе лә юҡҡа сығара, иң бөйөк урындарҙан түбән төшөрә һәм иң шөһрәтле фамилияларҙы харап һәм фәҡир итә. Шуның өсөн исраф итеүҙән бик һаҡланығыҙ, һәр эшегеҙҙә иҫәпле булығыҙ.

● Планлы кешенең малы аҙаймаҫ. Һаран кеше ас ҡалыр. Исраф итеүсе ауырыр, фәҡир булыр. Шуның өсөн аҡса сарыф итеүҙә һаран дәрәжәһенә төшмәгеҙ. Ләкин исраф та итмәгеҙ. Иҫәпле һәм планлы булығыҙ.

● Фәҡир булған хәлдә бай булып күренмәгеҙ. Бай булған хәлдә, фәҡир һүрәтендә йөрөмәгеҙ. Булғанығыҙ кеүек күренегеҙ, күренгәнегеҙ кеүек булығыҙ. Үҙегеҙҙән ҡаласаҡ ҡатындарығыҙҙың ирҙәре өсөн мал йыймағыҙ, ошо һүҙҙәр менән ғәмәл ҡылыу тейешле сара була.

## Байлыҡ - ярлылыҡ ҡағиҙәһе

● Мал - донъя тормошо өсөн зиннәт һәм әхирәт мәртәбәләрен кәсеп итергә сәбәптер. Шуның өсөн малығыҙҙы үҙегеҙгә донъяла шәрәф килтерәсәк һәм үлгәс, матур исем менән иҫкә алдырасаҡ урындарға сарыф итегеҙ.

● Әгәр мал Аллаһы Тәғәлә хәҙрәте бойорған рәүештә сарыф ителмәһә, бәндәне аҙаштырырға сәбәп була. Шуның өсөн малдың затын һөймәгеҙ, Аллаһы Тәғәлә хәҙрәте риза булмаған урындарға сарыф итмәгеҙ.

● Бәндәнең Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтенә тоташтырасаҡ дине һәм әҙәбе, ғилеме һәм гүзәл холҡо, донъя тулы малы булһа ла файҙаһы булмаҫ. Шуның өсөн малығыҙ ни ҡәҙәр күп булһа ла, дин тәрбиәһе алығыҙ, әҙәрле һәм гүзәл холоҡло булығыҙ.

● Малығыҙ менән файҙалы китаптар алығыҙ, мөғәллимдәргә вазифа биреғеҙ, үҙегеҙ һәм ғаилә хәжәттәрен башҡарығыҙ. Тейешле ерҙәргә Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн ғәзел саҙаҡа һәм һәҙиә бирегеҙ. Дин һәм милләт файҙаһына сарыф итегеҙ.

● Аллаһы Тәғәлә риза булмаған урындарға, махтар файҙаһына, насар урындарға, боҙоҡ холоҡло кешеләрҙең маҡтаныуҙарын ишетеү өсөн бер тин дә бирмәгеҙ. Бындай урындарға мал сарыф итеү әҙәм балаһының хөрмәтен ебәрә, иғтибарын юғалттыра, динен дә боҙа.

● Донъяғыҙ тар булһа ла Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтенән өмөтөгеҙҙе өҙмәгеҙ, иркен булһа, аҙғын һәм шәһүәт әсире булмағыҙ. Байлыҡ бер айлыҡ икәнен һәм күп бай фамилиялар аҙғынлыҡтары сәбәпле иң фәҡир булып ҡалғандарын иҫегеҙҙә тотоғоҙ.

● Фәҡирлек ғәйеп һәм ғәрлек түгел, кәсеп итергә көс етешмәгәнлек һәм кәсеп закондарын белмәгәнлектер, башҡаларҙан һоранып йөрөргә мәжбүр булыу ғәйептер. Шуның өсөн бер тарафтан фәҡирлек баш күрһәтһә, һеҙ ҙә икенсе яҡтан кәсеп итергә башлап, фәҡирлек менән көрәшегеҙ. Ғәйрәтегеҙ һәм Йәнәб-и Аллаһтың рәхмәте күләгәһендә фәҡирлекте еңеүегеҙ ихтимал. Нисек булһа ла, һоранып йөрөмәҫлек ҡәҙәр ризыҡ табырға тырышығыҙ. Был турала, зинһар, иҫәпкә алығыҙ.

● Бай булыу өсөн артыҡ ашыҡмағыҙ. Аҡса затын һөймәгеҙ. Тота белеп тотһаң, аҙ байлыҡ та етә. Ләкин кешеләргә йөҙ һыуы түкмәҫ ҡәҙәр көс хасил итер өсөн, арыҫландан ҡасҡан кеше кеүек, ашығығыҙ.

● Тырышып-тырышып та етәсәк дәрәжәлә байлыҡ хасил булмаһа, өмөтһеҙләнмәгеҙ. Холоҡ һәм фигелдәрегеҙҙе төҙәтергә тырышығыҙ. Холоҡтоң төҙәк булыуы - үҙе олуғ байлыҡтыр. Байлыҡ менән табылмаған хөрмәт һәм матур исемдәр күркәм холоҡ арҡаһында табылыр.

(Дауамы бар).

ШАҢДАУ



# ТАЛҠАҪ ТУРАҺЫНДА...

## тағы бер әрнеүле һүҙ



**Гөлбаныу Гәрәеваның "Киске Өфө"нөң 33-сө һанындағы "Үҙебеҙ ҡәҙерләп өйрәнмәһәк" исемле мәҡәләһенә битараф ҡала алмайынса, үҙ фекерҙәремде яҙып ебәрергә булдым. Сөнки ошо мәҡәләмдә сағыласаҡ уйҙар тынныслыҡ бирмәй, йөрәкте әрнетеп тик тора.**

Быйыл йәй мин дә тыуған яҡтарымда отпускыла булдым. Талҡаста булып китергә лә форсат тейҙе. Гүзәл Талҡаҫ буйы урындағы хужаларҙың битарафлығы, халыҡтың тәртипһеҙлеге, ситтәрҙең, бигерәк тә күрше Магнитогорск ҡалаһынан килгән "ҡунаҡтарҙың" баш-баштаҡлылығы арҡаһында йылдан-йыл нығыраҡ бысрана икәнен үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Ярҙары сүп-сарға тула бара, ағастары ҡырҡыла, ере ҡаҙыла, яндырыла. Пластик ҡый-һай менән тулып бара тирә-яғы Талҡаҫыбыҙҙың. Шул уҡ ваҡытта халыҡ йылдан-йыл был төбәккә ял итергә күберәк килә, Талҡаҫ буйына ағылған машиналарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Кемдәрелер ысынлап та машина менән яр буйына тиклем үк килеп туҡтай. Кешеләрҙең тәртипһеҙлеге, хужаларҙың битарафлығы арҡаһында бәләкәй генә, һаҫыҡ, һыу инеүе лә ҡурҡыныс бер күләүек булып ҡалыр микән ни тыуған еребеҙҙең бер мөғжизәһе булған Талҡаҫ?

Был хәлгә еткермәҫкә, ҡурсаларға, һаҡлап ҡалырға ине күлебеҙҙе. Күптән күтәрелеп килгән мәсьәлә был, ләкин ыңғай үҙгәреш күренмәй.

Миненсә, урындағы власть органдары менән халыҡтың бер булып, тәбиғәткә ҡарата ҡылынған вәхшилеккә ауыһыҙ көрәш асыуы кәрәк. Район предприятиелары, ойошмалары хеҙмәткәрҙәренән, йәмәғәтселек вәкилдәренән, йәштәр һәм студенттарҙан, тәбиғәтебеҙгә битараф булмаған граждандарҙан торған экологик дружиналар, отрядтар төҙөү мөмкин эштәр, тип уйлайым. Уларға закон сиктәрендә булған вәкәләттәр биреп, хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәрен дә йәлеп итеп, Талҡаҫ буйында даими рейдтар үткәреп торорға булыр ине. Ҡала һәм район Советының махсус комиссиялары, ветерандар Советы, йәштәр ойошмалары, мәктәп һәм башҡа мәғариф учреждениелары ситтән күҙәтеүсе ролендә ҡалмаһын, киреһенсә, халыҡты йәлеп итеп, күл буйында санитар өмәләр ойоштороуҙы ла күҙаллаһын ине.

Шифахана һәм уның биләмәләре генә түгел, халыҡтың күпләп ял иткән йәмәғәт урындары ла таҙа, санитар нормаларға тап килергә тейеш, бының өсөн райондың торлаҡ-коммуналь ойошмалары яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алһа, яҡшыраҡ булыр ине. Һыу инергә килгән халыҡты, ситтән килгән әрһеҙ "ҡунаҡтарҙы" һәр ерҙә тәртипкә саҡырып тороусы белдереүҙәр һәм иҫкәрмәләр ҡаршы алып торһон. Яр буйҙары тәбиғи бәҙрәфкә әйләнмәһен өсөн кәрәкле урындарҙа бәҙрәфтәр, биотуалеттар урынлаштырырға мөмкиндер бит. Сүп-сар өсөн дә урналар күпләп урынлаштырылырға һәм йыйылған сүп-сарҙы йыышыраҡ сығарып торорға кәрәк.

Эйе, бөгөн таҙа һыу, таҙа тәбиғәт өсөн көрәшмәйенсә булмаясаҡ. Әле һыуҙа батыусыларҙы ҡотҡарыу буйынса дәүләт хеҙмәте эшләп килһә, бөгөн инде, киреһенсә, йылға-күлдәрҙе һыу инеүселәрҙән ҡотҡарыу, ҡурсалау хеҙмәте булдырыу мохтажлығы тыуҙы. Ерҙебеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе, вәхшилектән ҡотҡарыу эше үҙебеҙҙең өҫтә, был һәр кемдең бурысы булырға тейеш. Ләкин тәбиғәт өсөн көрәш кемдәндер табыш сығанағына әүерелергә тейеш түгел. Уларҙың кәрәкле урында шлагбаум менән һаҡ ҡуйып, ял итергә теләүселәрҙе "һауып" ултырыуына юл ҡуйырға ярамай. Хаҡ алына икән, хеҙмәтләндереү ҙә булһын. Алынған килемдең һәр бер тине район бюджетының тәғәйен статьяһында урынлаштырылһын.

Йыш ҡына, урмандарҙы, йылға-күлдәрҙе кемдәргәләр арендаға биреп йәки һатып ҡына уларҙы һаҡлап була, тигән фекерҙе ишетергә тура килә. Мин бының менән килешә алмайым, сөнки ошо төбәктә тыуып үҫкән һәр кемгә атаәсәһендәй ҡәҙерле Талҡаҫта, Граф күлендә, аҡса түләп, ваҡытлыса ғына ял итеү хоҡуғына эйә булыу үҙе бер фажиғә буласаҡ. Тәбиғәт балаһы башҡорт үҙ ер-һыуына үҙе хужа булһын, үҙ өйөндә тәртипте үҙе булдырһын.

Бер кем дә, бер нәмә лә был донъяға ҡабат килмәй, бөтәһе лә ваҡытлыса бирелгән. Ошоно аңлап, балаларыбыҙға ла аңлатып, Хоҙай Тәғәлә биргән ниғмәттәренә - ер-һыуына рәхмәтле, һаҡсыл һәм мәрхәмәтле булып йәшәргә бурыслыбыҙ барыбыҙ ҙа.

**Тамара ИЛЕМБӘТОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

# БЕЛЕКҺЕҘГӘ БЕЛЕМ ЙОҠМАҪ...

## яуызға иман килмәҫ

● Ахмаҡ янында аҡыллылығыңды әллә ни күрһәтмә: уның да ғиләлле һүҙ әйтеүе бар.

● Туймаҫтай булып, һәр ризыҡты күп ашама - аштың аҙы ҡарар, дауалар, күбе - зарар, тигән төрөк мәҡәлен иҫеңдә тот.

● Йәшәүеңдә үҙ йондоҙоң яҡтыртҡан юлың булһын: заман үҙгәрешенә яраҡлашыу өсөн үҙеңдә булмаған сифаттарҙы күңеленә һалма, уйыңа йәбештермә.

● Яңилдарҙан һаҡлан, аҡыллыларҙан фәһем ал: ике яһил сәкәләшеп ил тарҡата, ике аҡыллы кәңәшләшеп, юл яһата, ил ҡотайта.

● Үлем ҡайғыһы бер илатһа, тере ҡайғы көн дә сеңләтә - быны күңеле һиҙгер, аҡылы аҫыл кеше генә белә.

● Ҙур сабырлыҡ бигерәк тә ике мәлдә кәрәк: әҙәм балаһын тыуҙырғанда һәм мәңгелек юлға оҙатҡанда.

● Белекһеҙгә белем йоҡмаҫ, йүнһеҙгә йүн ҡунмаҫ, яуызға иман килмәҫ.

● Ғүмер юлында өрөүселәр, көләүселәр, этеүселәр күп булыр, рух көсөң ныҡ булһа, барыһы ла көлдәй осор.

● Байлыҡ, тип йән атма: ул үҙ эсеңдә бикләп туңдырыусы мәңге иремәҫ һалҡын боҙ.

● Яңылыш юлға баҫмаҫ өсөн күҙең күргәндә күңелең баһалаһын, телең һөйләгәндә йөрәгең ҡабул итһен.

● Үҙ бәҫен төшөрмәгән халыҡ милләт бәҫен дә төшөрмәҫ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш




Көндөң болотло булыуы беҙҙе тирә-яҡты ләззәтләнеп ҡарау-күҙәтеүҙән мәхрүм итте. Мин элек барса Урал сығанаҡтарының бейек урындарҙан һәм һаҙлыҡлы тауҙарҙан башланыуы хаҡында иҫкә алып киткәйнем инде; шуға күрә һыуҙың нисек итеп тау түбәләренә тиклем күтәрелеүе тураһында мотлаҡ әйтеп үтергә кәрәк.

Был турала ғилемле заттар төрлөсә уйлай: ҡайһылары һыуҙың ер аҫты каналдары буйлап сығанаҡтарға тиклем килеп етеүен, төрлө урындарҙа ерҙең өҫкө ҡатламын тишеп сығып, йылғаларға баш биреүен күҙ алдына килтерә. Бәғзе берәүҙәре шундай уҡ һыу юлдарын уйлап сығарып, тәүгеләренән айырмалы рәүештә, һыуҙың таулы ерҙәргә барып етеп, ер аҫты утынан быуға әйләнеүе, юғарыға күтәрелеүе һәм тау баштарындағы ҡая ярыҡтарында һәм ҡыуышлыҡтарында тамсы булып тупланып, бергә ҡушылыуҙан шишмә сығанағы барлыҡҡа килтереүе хаҡында һүҙ йөрөтә. Бындай ҡараштарҙы хуплау йәиһә кире ҡағыу минең эшем түгел: минән башҡа ла был турала тотош китаптар яҙылған, ә миңә һауа юлдары буйлап килеүсе диңгеҙ быуҙарынан һыу сығанаҡтарының барлыҡҡа килеүе хаҡындағы ҡарашҡа инаныу өсөн Ирәмәл тауының бик күп дәлилдәр биреүе тураһында ғына әйтәһе ҡала. Ошо ҡараш яҡлылар быуға әүерелгән диңгеҙ һыуының бөтә Ер шары буйлап осоп йөрөп, таулы урындарға еткәс, һалҡын булғанлыҡтан түбән төшөүе һәм, бергә тупланып, йылға баштарын барлыҡҡа килтереүе хаҡында фекер йөрөтә. Ҡышын ябай ғына тәжрибә беҙгә быуҙың һалҡын урында ҡуйырырға һәм түбән төшөргә тейеш икәнен көн һайын күрһәтеп тора. Ҡаты һалҡындар ваҡытында яғылған бүлмәлә тәҙрәләрҙең тышҡы яҡтан түгел, ә эстән туңыуы хаҡында кемебеҙ ҙә белә; өй эсендәге һыу парҙары, тәҙрәләр янында һалҡын булғас, шунда йыйыла һәм, тәҙрәгә йәбешеп, һыуыҡта туңа. Тау баштарында тигеҙ ерҙәгенән һалҡыныраҡ икәне тураһында тауҙарҙа булған һәр кемгә билдәле; бейек тау һырттарында ятыусы ҡарҙар ошоға бынан да яҡшыраҡ ышандырта. Тәбиғәт тикшереүселәр тәү ҡарамаҡҡа ҡапма-ҡаршылыҡлы булып тойолған ошо күренеште ҡояш нурҙарының төрлө сифаты менән аңлата. Улар беҙ тигеҙ ерҙә ике төрлө, йәғни тура һәм ер өҫтөнән сағылған нурҙар йоғонтоһонда булабыҙ, ә һуңғылары тау башына барып етмәй икән, тип иҫбат итә.

Минеңсә, Ирәмәл тауы һыу сығанаҡтарының килеп сығышы хаҡындағы ошо ҡарашҡа бар яҡлап та тап килеп тора. Уның башы күбеһенсә һәр саҡта ҡуйы томан менән ҡапланған була; күсеп йөрөүсе башҡорттар ошо тау янында аяҙ көндәрҙең һирәк булып, һәр саҡта йә ямғыр, йә йәй уртаһында ҡар яуыуы хаҡында бер тауыштан һөйләй. Ирәмәлдең һаҙлыҡлы түбәһе үҙе үк башҡорттар һөйләгәнде раҫлап тора. Уйлауымса, йылғаларҙың төрлөсә булыуын ошоға дәлил итеп килтерергә була. Иң билдәле йылғалар Яман Тауҙан һәм Ирәмәлдән ағып сыға: тау тәпәшерәк булған һайын унан һыу сығанағы ла аҙыраҡ була. Бөтөнләйгә шулай, тип раҫлау ҙа дөрөҫ булмаҫ ине: йыш ҡына тәпәш тауҙар һәм түбән урындарҙан да бигүк бәләкәй булмаған йылғалар ағып сыға...

...Ырымбур Уралы үҙәгендә беҙгә йәй уртаһында булырға тура килде, был башҡорттарҙың барса байлыҡтары арта барған саҡ була. Беҙҙең ябайыраҡ кешеләр араһында ҙурлап ҡунаҡ булышыу йыш ҡына, улар әйткәнсә, хаҡтар арзанайған саҡҡа ҡалдырылған кеүек, башҡорттар ҙа оло мәжлестәрҙе үҙҙәренең ҡымыҙға иң бай булған сағында йыя. Туй йолаһын атҡарғанда ҡорған мәжлестәре иң ололарынан һанала. Татарҙар менән бер диндә булғанлыҡтан, туй йолалары бар яҡтан да тиерлек уларҙыҡына оҡшаш була һәм ошолай башҡарыла.

Тәүҙә улар сит кешеләр аша ҡоҙалаша; ике яҡтың да аталары ризалашҡан хәлдә, балаларының, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ затының ихтыярын белеү мотлаҡ, тип һанала: шуға күрә кәләштең атаһы күп сит кешеләр алдында үҙенең ҡыҙына кейәүҙең уға оҡшау-оҡшамауы кеүегерәк һорау бирә. Риза булыу йәиһә кире яуап барыһын да хәл итә. Шунан һуң ҡалым тураһында килешеүгә күсәләр, уның күләме 200 һумға тиклем барып етә, кәләштең атаһы шул аҡсаға ҡыҙына кәрәк булған барса кейем-һалымды һатып ала.

Башҡорттарҙың кейеме татарҙарҙыҡынан айырылып тора. Байрам көндәрендә улар төрлө төҫтәге һәм сифаттағы, халатҡа ошатып тегелгән, типкән тип аталған буҫтау кафтан кейә, ул ситтәренән ике рәт сәйлән менән ҡаймалап алынған, ҡай сағында алғы яҡтан элмәктәре лә сәйлән ҡушып тегелгән була. Был уларҙың бар өҫкө һәм эске кейемдәрен тәшкил итә; татар ҡатындарының бишмәте кеүек эстән кейелә торған кейемдәре һирәк осрай. Туранан-тура тәндәре өҫтөнә кейгәндәре бер оҙон һәм ҡалын күлдәктән ғибәрәт. Баш кейемдәре, татар ҡатын-ҡыҙҙарыныҡы кеүек, ҡашмау тип атала (Лепехин "кашпау", тип яҙа. - **Ред. иҫк.**); айырма бары ҡашмау өҫтөнән кейелеп, алып-һалынып тороусы конус формаһындағы өҫлөктән хасил була. Ҡашмауҙан артҡа табан көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән ҡалаҡбаш төшөрөлә, ул Нуғай юлында йәшәүсе башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарында бар яҡлап та татар ҡыҙ-ҡатындарыныҡына оҡшаш; Себер юлы буйлап күсеп йөрөгәндәренеке бер аҙ айырыла. Уларҙа ҡашмауҙың арт яғындағы ҡалаҡбаштан - ҡашмау ҡойроҡтан (кашпау кайрюк) башҡа, бөтә арҡа буйына төшөп тороусы, шулай уҡ көмөш тәңкә һәм сәйлән менән биҙәлгән, бәйләүес бауҙары күп булған, әмйән (амьян) тип аталған киң ҡалаҡбаштары була. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла, ирҙәре лә бер ҡасан да сабата киймәй; Өфө өйәҙендә үҙ күндәренән тегелгән ситек, ә Исәт провинцияһында башы ғына күн, ҡалған яғы буҫтауҙан тегелгән бахила кейәләр.

Ҡалым тураһында һөйләшеп килешелгәс, кәләштең атаһы, эште артыҡ оҙаҡҡа һуҙмайынса, доға уҡып алғас, кәләш менән кейәүҙе махсус шаршау артына индерә (күрәһең, бында һүҙ сымылдыҡ хаҡында бара. - **Ред. иҫк.**); шунан һуң кейәү, татарҙарҙағы кеүек, ҡалымды тулыһынса түләп бөткәнсе кәләше янына килеп йөрөү хоҡуғына эйә булып, уның ҡуйынына инә ала. Башҡорттар кәләш ҡуйынына инеү өсөн тәғәйенләнгән махсус тирмә ҡора, ә кейәүенең килеүе хаҡында хәбәр алған кәләш үҙенең дуҫ ҡыҙҙары һәм иң яҡын туғандары менән шунда бара...

Ҡалым түләп бөткәс, татарҙарҙа ҡабул ителгән тәртип буйынса, кейәү кәләшенә ҡарата ир хоҡуғын тулыһынса ала. Ғәҙәттә, ҡыҙ атаһы йортонда булған һуңғы көндә башҡорттар мәжлес уҙғара, был ваҡытта кәләш йәйләүҙәге барлыҡ тирмәләрҙе йөрөп сығып, ҡыҙ-ҡатындар менән хушлаша. Был саҡта уның йөҙө яулыҡ йәиһә сигелгән селтәр менән ҡапланған була, уны уратып алған бер төркөм дуҫ ҡыҙҙары бер туҡтауһыҙ иламһырап ҡысҡырышҡан тауыштар сығара (бында автор сеңләү йолаһын шулай тасуирлай. - **Ред. иҫк.**). Мулла тарафынан законлы йола талаптары үтәлгәс, кейәү үҙенең туған-тыумасаһы менән үҙ олоҫона йәиһә тирмәһенә ҡайтып китә. Кәләште бар булған бирнәһе менән юлға әҙерләйҙәр һәм кейәү йортона тиклем һыбай алып баралар. Дуҫ ҡыҙҙары уны йәйләүҙән бер аҙ оҙата барып, үҙ тирмәләренә ҡайтып китә; кәләш янында иң яҡын туғандары һәм ҡоҙағый ғына ҡала, уныһы кейәү йортона яҡынлаша башлағас, кәләш менгән аттың теҙгенән тотоп барып, йыраҡтан уҡ бар тауышына ниндәй тауар менән килеүе һәм уның ни хаҡ булыуы хаҡында ҡысҡыра килә. Шул саҡта кейәүҙең атаһы йәиһә туғандары ҡоҙағый менән һатыулашырға мәжбүр булып, киленде уның ҡулынан ниндәй ҙә булһа бүләк, мәҫәлән, ат биреп, һатып ала. Бүләк хаҡында килешелгәс, ҡоҙағый, беҙҙә ат һатҡандағы кеүек, ҡайны тарафынан ебәрелгән ҡатындарға теҙгенде кафтан итәге менән тотоп бирә, алыусылар ҙа теҙгенде итәктәре менән тотоп ала. Ишек алдында кәләш аттан төшә; шул саҡта кейәүҙең ике яҡын ҡыҙ туғаны уны ҡулдарынан алып, өйгә индерә. Ҡайныһын йәки ҡәйнәһен, йә улар урынына иренең яҡын туғандарын күреү менән, килен тантаналы ҡиәфәттә уң аяғына тубыҡланып, һул тубығы өҫтөнә ҡулын ҡулға һала. Ошо рәүештә баш эйгәндән һуң, янындағы ҡыҙҙар ҡулдарынан тотоп торғоҙоп, өс аҙым алға атлатҡас, ул тағы ла ошолай уҡ баш эйеп сәләмләй, был өс тапҡыр ҡабатлана. Шунан аҙаҡ уны шаршау артына индерәләр, һәм мәжлес башланып китә, әммә унда килен ҡатнашмай, был ваҡытта ул йәш-елкенсәк менән күңел асып, үҙенең иркенлектә уҙған йәш сағы менән хушлашҡан кеүек була; кейәү үҙенең йәш ҡатыны янына төнөн, ҡасып-боҫоп ҡына килә. Уларҙа туй мәжлесендә ҡунаҡ булышыу өс көн һәм унан да оҙағыраҡ бара: шул саҡта һәр кем, үҙ мөмкинлегенә ҡарап, яңы өйләнешкән йәштәргә бүләк тапшыра.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!



# "ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ..."

Михаил Кутузов, дошмандың иғтибарын ситкә йүнәлтеү һәм ғәскәрҙәренең хәлен еңеләйтеү маҡсатында, казак ғәскәрҙәренә дошмандың һул флангыһына һәм тылына һөжүм итергә бойороҡ бирә. Платов менән Уваровтың атлылары (1-се башҡорт полкы ла улар сафында була) Яңы Смоленск юлы буйындағы Валуево ауылы эргәһендә француздарҙың тылына сығып, француз ғәскәренең һул флангыһында ығы-зығы тыуҙыра. Наполеон төп йүнәлештән алып, уларға ҡаршы 28 мең кешелек ғәскәр ебәрергә мәжбүр була. Рус ғәскәрҙәренең ошо ынтылышы Бородино һуғышындағы һынылышта ыңғай роль уйнай. Наполеон флангылағы ғәскәр менән мәшәҡәтләнгән арала, Кутузов төп ғәскәрен Бородино һуғышына әҙерләп өлгөрә.

Рус ғәскәренең яуап һөжүмгә әҙерләнгән осоронда башҡорттар, мишәрҙәр, типтәрҙәр, Ырымбур һәм Урал казактары Наполеон ғәскәренең тылында һуғышҡан атлы отрядтар сафына инә. Ә 1812 йылдың сентябрендә үрҙә һанап үтелгән полктар полковниктар Ефремов, Ҡудашев, Давыдовтарҙың махсус ойошторолған партизан отрядтарында булалар.

Октябрь айы башында, француздар Мәскәүҙе ташлап китергә мәжбүр булғас, рус ғәскәрҙәре араһында башҡорт полкынан бер нисә йөҙ һәм 1-се мишәр полкы Рәсәйҙең баш ҡалаһына инә. 1-се мишәр полкы Мәскәүҙә ҡадырыла һәм 1814 йылда һуғыш бөткәнгә тиклем гарнизон хеҙмәтен үтәй.

Мәскәүҙе азат итеү өсөн барған һуғыштар тураһында шул йылдарҙа сығарылған "Любизар" исемле башҡорт йырында бик яҡшы әйтелә.

Француздар килеп ингән
Мәскәү тигән ҡалаға.
Беҙҙең ғәскәр ҡыҫып алғас,
Сығып ҡасты далаға.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!
Наполеонға тәхет кәрәк,
Үҙ еренә һыймаған.
Мәскәүҙәргә килеп ингәс,
Ул да үҙе һынаған.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!
Француздар танынылар
Әрәсәйҙә үҙҙәрен,
Урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлағас,
Таба алмайҙар эҙҙәрен,
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

Шулай уҡ "Ҡаһым түрә" легендаһында ла Мәскәү өсөн һуғыш үҙенсәлекле сағылыш тапҡан: "...Наполеон урыҫ батшаһы Александрҙы Мәскәүҙән ҡыуып сығарған. Александр батша ғәскәре менән Мәскәүҙе кире үҙ ҡулына алыу өсөн ни тиклем һуғышһа ла, булдыра алмаған. Көн уйлаған, төн уйлаған, көндәрҙең береһендә бер уйға килә алған да, үҙенең һанаттарына әйткән: "Минең ҡул аҫтында башҡорт тигән халыҡ бар бит әле. Шуларҙан ғәскәр һорап ҡараһаҡ, ҡалай булыр икән?" - тигән. Һанаттар: "Дөрөҫ әйтәһең, батша хәҙрәт, был эште булдырһа, шулар ғына булдыра инде", - тигәндәр. Башҡорт иленә илсе ебәргәндәр. Был хәбәрҙе алғас, башҡорттарҙың аҡһаҡалдары йыйылышып, кәңәш-төңәш иткәндәр. "Барайыҡ, шул дошмандарҙы айҡайыҡ, батырлығыбыҙҙы күрһәтәйек", - тигәндәр. Тирә-яҡҡа оран ебәргәндәр. "Һуғышырға теләгән кешеләр, ҡоралдарын алып, аттарына менеп сыҡһын", - тигәндәр. Йыйылышып, һуғышырға тип, юлға сыҡҡандар. Башлыҡ итеп Ҡаһым түрәне һайлағандар. Мәскәүгә барып еткәндәр. Башҡорт халҡын күреү менән,Наполеон Мәскәүгә ут төрткән дә ғәскәрен алып ҡаса башлаған. Ҡаһым түрә Наполеондың артынан баҫтыра башлаған. Наполеон ғәскәрен һуҡтырып, рус батшаһы еренән сығарып ташлағандар".

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Гардановтың Башҡортостанда дәүләт теле булған башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы сығыуы уның үҙенең ошо Рәсәй законына ҡаршы булыуын туранан-тура күрһәтеп тора.***

# БЕР ТЕЛДӘН ДӘ кәм күрер тик

**Кешелек тарихының иң боронғо осорона күҙ һала алһаҡ, ошо архаик замандарҙа йәшәүсе тәү бабаларыбыҙҙың тел ярҙамында бер-береһе менән аралаша, хәбәрләшә, фекерләшә алыуы арҡаһында ғына Ер шарындағы йәнле заттар араһында ҙур өҫтөнлөк менән файҙаланып, аңлы йәмғиәт төҙөй алыуына инанып инек. Был өҫтөнлөк Библияла ла образлы сағылыш тапҡан: Хоҙай Әҙәмдең үҙенә тирә-йүндәге бар нәмәне лә исемләп атау мөмкинлеген биреп, ошо хәлде ҡарап-күҙәтеп торҙо, тиелә унда. Нисек кенә булмаһын, меңәр йылдар дауамында Ер йөҙөндә меңәрләгән яңы телдәр бар булып, байтағы хәҙерге заманға тиклем һаҡланып ҡалған. Ошо телдәрҙең һәр береһе иҫ китмәле хазинаға тиң. Башҡорт теле лә боронғо телдәрҙең береһе булараҡ, үҙенең хәҙерге ысынбарлығында төрки халыҡтарының ғына түгел, һинд-европа, фин-уғыр ҡәүемдәренә ҡараған халыҡтар телдәренә лә хас фонетик һәм лексик үҙенсәлектәрен һаҡлаған. Башҡорт теленең боронғо ҡатламдарын ғилми яҡтан төплөрәк һәм киңерәк ареалда тикшереү киләсәктә лингвистика өлкәһендәге яңы асыш-табыштарға илтәсәк, тип ҡыйыу фаразларға була.**

## Коммунистар ҡаршымы, әллә элекке мәғариф министрымы?

Бөгөнгө яҙмаларым тел ғилеме менән түгел, ә сәйәсәт вә шәхсиәт менән бәйле. Һуңғы арала, бигерәк тә Башҡортостан Республикаһы Президенты алышынғас, башҡорт теленең мәктәптәрҙә дәүләт теле булараҡ уҡытылыуына ҡаршы сығып, быны уҡыусылар өсөн зыянлы, тип фаразлаусылар күбәйә башланы. Ватандаштар, тип нарыҡларға тел дә әйләнмәгән ҡайһы бер әфәнделәр өсөн бөгөн башҡорт теленән дә яманыраҡ һәм ҡурҡынысыраҡ дошман юҡ, һәм улар уны дөйөм белем биреү учреждениеларында өйрәтеүҙе законһыҙ, тип иҫбатларға маташа. Бынан әллә ниндәй трагедия яһауҙың кәрәге юҡтыр, әммә йәмғиәттә таратылған ҡотҡоноң бәғзе бер осраҡтарҙа кешеләрҙең аңын томалап, реаль буталыш һәм хәүефле низағ-конфликттарға юл асыуы билдәле. Бөгөн мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙы ниндәйҙер хәүефле күренешкә тиңләүселәр, уға ҡаршы пикет-маҙар ойоштороусылар үҙҙәре халыҡ араһында көсөргәнешлек тыуҙырып, әлегә тиклем Башҡортостанда ныҡ тамырланған милләт-ара татыулыҡҡа, һыйышып һәм килешеп йәшәүгә төҙәтеп булмаҫлыҡ зыян килтерә.

Әйткәндәремде раҫлар өсөн артыҡ алыҫ йөрөйһө юҡ. Күптән түгел ҡайһы бер Рәсәй партияларының Башҡортостан бүлексәләре етәкселәре БР Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашҡан саҡта КПРФ-тың республика комитеты беренсе секретары Рифғәт Гарданов, күҙ ҙә йоммайынса, милли-төбәк компоненты предметтары башҡа фәндәрҙе өйрәнеүгә зыян килтерә, тип сығыш яһаны. Уныңса, йәнәһе, төбәк предметтары уҡыу планының 5 процентынан да артмаҫҡа тейеш, шулай булғас, иң тәүҙә башҡорт телен ҡыҫҡартыу маҡсатҡа ярашлы, имеш. Башҡортостан Республикаһының элекке мәғариф министры Рәсәй законын Татарстан менән Башҡортостандың ғына "тупаҫ" боҙоуы хаҡындағы уйҙырмаһын бар халыҡҡа еткереүҙе хуп күрҙе. Ни өсөн, тиһегеҙме? Татарстанда - татар теле, Башҡортостанда башҡорт теле мәктәптәрҙә дәүләт телдәре сифатында уҡытыла бит. Был осраҡта ниндәй закондың һәм нисегерәк боҙолоуы тураһында һүҙ ҡуҙғатмағанда ла, Гарданов әфәнденең үҙенә сит-ят булмаған ике халыҡты тамсы ла хөрмәт итмәүе хаҡында әйтеү урынлылыр. Ваҡытында ошо республикала оло вазифа биләп, уның етәкселегенән ҡәҙер-хөрмәт күргән элекке чиновниктың ялған идеология ҡолона әүерелеүенәнме, әллә үҙен хәҡиҡәткә эйә булыусы берҙән-бер зат итеп күреүенәнме - быны дөрөҫ кенә билдәләүе лә ҡыйын, әммә Рифғәт Гардановтың "хәҡиҡәт"е күрәләтә ялғанға тиң. Быны иҫбат итеүе ҡыйын түгел.

Белеүегеҙсә, беҙ конституцион демократик дәүләттә йәшәйбеҙ, һәм беҙҙең һөйләгән һүҙҙәребеҙҙең дә, ҡылған ғәмәлдәребеҙҙең дә хаҡлығы конституция һәм закон тип аталған хоҡуҡи бизмәндә үлсәнеп билдәләнеүе фарыз. Шулай булғас, Рәсәй Конституцияһындағы 68-се статьяның 2-се пунктында ниндәй хәҡиҡәт сағылыш табыуын иҫегеҙгә төшөрмәксемен, хөрмәтле Гарданов әфәнде: "Республикалар үҙ дәүләт телдәрен булдырырға хоҡуҡлы. Республикаларҙың дәүләт власы органдарында, урындағы үҙидара органдарында, дәүләт учреждениеларында улар Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле менән берҙәй ҡулланыла". Тимәк, оло Ватаныбыҙ - Рәсәйҙең Төп законына ярашлы, Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәре - рус һәм башҡорт теле - бер үк конституцион-хоҡуҡи статусҡа эйә. Шунан һуң тағы кем ни йөҙө менән башҡорт телен кәм күрергә баҙнат итер икән?

***Рәсәй Конституцияһындағы 68-се статьяның 2-се пунктында ниндәй хәҡиҡәт сағылыш табыуын иҫегеҙгә төшөрмәксемен, хөрмәтле Гарданов әфәнде: "Республикалар үҙ дәүләт телдәрен булдырырға хоҡуҡлы. Республикаларҙың дәүләт власы органдарында, урындағы үҙидара органдарында, дәүләт учреждениеларында улар Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле менән берҙәй ҡулланыла". Тимәк, оло Ватаныбыҙ - Рәсәйҙең Төп законына ярашлы, Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәре - рус һәм башҡорт теле - бер үк конституцион-хоҡуҡи статусҡа эйә. Шунан һуң тағы кем ни йөҙө менән башҡорт телен кәм күрергә баҙнат итер икән?***

Йөрәгендә тыуған халҡының намыҫын һаҡлаған, шиғриәтендә уның хазиналай телен данлаған Рәмиебеҙ мең тапҡыр хаҡлы: "Кәм күрер тик уны кәм күңел".

Ә Рәсәй закондары, уларҙы бар осраҡта ла теүәл һәм ғәҙел, тип нарыҡлап булмаған хәлдә лә, илебеҙ халыҡтары телдәрен кәм күрмәй. "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Федераль закондың илебеҙ халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм ҡулланыу өлкәһенә арналған 6-сы статьяһында милли республикаларҙың дәүләт телдәре үҫешенә булышлыҡ итеү бурысы юғары дәүләт власы органдары йөҙөндә Рәсәй Федерацияһы вәкәләттәренә ҡарай, тип бар донъяға белдереү ошо фекеребеҙҙе раҫлап тора бит! Тимәк, КПРФ өлкә комитеты секретары Гардановтың Башҡортостанда дәүләт теле булған башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы сығыуы уның үҙенең ошо Рәсәй законына ҡаршы булыуын, хатта республика Президентын ошо законды боҙорға саҡырыуын туранан-тура күрһәтеп тора. Бөгөн Рәсәй законын башҡорт теле уҡытыусылары түгел, ә һүҙ барған законды бар тип тә белмәүсе, уны үтәмәҫкә өгөтләүсе элекке мағариф министры боҙа!

Йәнә, "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында" ғы Закондың Рәсәй халыҡтары телдәрен өйрәнеү һәм уҡытыу нормативтарын билдәләүсе 10-сы статьяһын иҫкә алмайынса булмай. Ошо статьяның 3-сө пунктында "Республикаларҙа дәүләт телдәрен һәм башҡа телдәрҙе уҡытыу уларҙың ҡануниәтенә ярашлы башҡарыла", тип асыҡтан-асыҡ, боронғоса әйткәндә, аҡҡа ҡара менән яҙылған. Тик шуныһы: "Законлылыҡ кәрәк!"- тип даулашҡан Гарданов әфәнде ни эшләп башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ ошо хоҡуҡи нормативҡа ярашлы уҡытылыуын күрмәмеш тә белмәмеш икән?

Рәсәйҙең милли республикаларында дәүләт телдәрен уҡытыуҙың аҙмы-күпме, әммә барыһы өсөн дә фәһемле булырҙай тарихы яҙыла ғына башланы әле. Шул ыңғайҙан ут күршебеҙ Татарстанда татар телен республиканың дәүләт теле сифатында уҡытыу буйынса байтаҡ тәжрибә тупланған: ул Татарстан мәктәптәрендә 1994 йылдан бирле өйрәнелә. Әйтергә кәрәк, бында төрлө типтағы һәм төрҙәге белем биреү учреждениелары өсөн төрлө уҡыу пландарын файҙаланыу маҡсатҡа ярашлы, тип табылған. Татарстан Республикаһы Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, бөгөн ошо уҡыу пландарының 16 төрө бар. Мәҫәлән, милли татар мәктәптәрен иҫәпкә алмағанда, сыуаш, мари, удмурт һәм башҡа аҙ һанлы милли мәктәптәрҙә татар телен өйрәтеү өсөн аҙнаһына 1 сәғәт кенә бүленһә (был бик дөрөҫ: әлеге мәктәптәрҙә уҡыусыларға шулай уҡ рус телен, үҙҙәренең туған телдәрен, сит ил телен дә өйрәнергә кәрәк бит), башҡа мәктәптәрҙә ул 2-3 сәғәтлек программаға ярашлы уҡытыла. Ә кемдеңдер лингвистик йүнәлештәге махсус класҡа яҙылғыһы килә икән, ул бында татар телен аҙнаһына 5 сәғәт күләмендә өйрәнәсәген алдан уҡ белеп тора.

Үҙ ваҡытында Татарстанда ла татар телен бар мәктәптәрҙең дә уҡыу пландарына индереү менән риза булмайынса, низағлашҡан, дәғүәләшкән кешеләр булыуын инҡар итеп булмай. Уларҙың береһе 2004 йылда ошо бәхәсле тип иҫәпләнгән һорау менән Рәсәйҙең иң юғары юридик инстанцияһы - Конституция Судына ла мөрәжәғәт итте. Шулай итеп, был проблеманы хәл итеү бурысы Рәсәй Федерацияһының иң квалификациялы һәм абруйлы хоҡуҡ белгестәренә тапшырылды. Шуныһы ғәжәп, бөгөн Башҡортостанда шул уҡ, йәғни бынан теүәл 6 йыл элек үк ахырынаса хәл ителеп, тейешле юридик ҡарар ҡабул ителгән мәсьәләне, Рифғәт Гарданов әфәнде кеүек үк, Башҡортостан Президентынан яңынан ҡарауҙы үтенеүселәр, хатта талап итеүселәр бар. Үҙҙәрен белемле, цивилизациялы шәхес итеп баһалаусы заттар боронғо римлеләрҙең "Dura lex, sed lex", йәғни "Закон ҡаты, әммә ул закон" тигән мәңгелек хәҡиҡәте менән мотлаҡ иҫәпләшергә тейештер бит.

## Рәсәй Конституция Суды законлылыҡ яҡлы

Рәсәй закондары нигеҙендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың законлылығын иҫбат итеү генә түгел, уны артабан камиллаштырыу өсөн дә бөтә мөмкинлектәр бар. Һәм иң элек беҙгә ошондай мөмкинлекте Рәсәй Федерацияһы Конституция Судының 2004 йылдың 16 ноябрендә Татарстан Республикаһында татар теленең дәүләт теле сифатында рус теле менән бер күләмдә уҡытылыуының Рәсәй закондарына ярашлы булыу-булмауын билдәләү буйынса ҡабул иткән ҡарары бирә. Әйтергә кәрәк, Рәсәй Конституция Суды юристары ошо ҡарарҙы ҡабул иткәндә граждандарҙың һәм милләттәрҙең халыҡ-ара хоҡуҡи азатлыҡтарын нигеҙ итеп алды, Рәсәйҙең федератив дәүләт булараҡ милли республикаларға биргән вәкәләттәрен дә иҫәптән сығарманы. Конституция Суды ҡарарының 4-се пунктында ошо хаҡта бына нисек яҙылған: "4. Государственные языки республик - один из элементов конституционного статуса этих субъектов Российской Федерации, который определяется Конституцией Российской Федерации и Конституцией республики (статья 66, часть 1, Конституции Российской Федерации) и вместе с тем обусловлен федеративным устройством Российской Федерации, основанном на ее государственной целостности, единстве системы государственной власти, разграничении предметов ведения и полномочий между органами государственной власти Российской Федерации и органами государственной власти субъектов Российской Федерации, равноправии и самоопределении народов в Российской Федерации (статья 5, часть 3, Конституции Российской Федерации)".

Рәсәй Федерацияһының Конституция Суды ҡарарына ярашлы, татар телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу үҙенең конституцион-хоҡуҡи асылы буйынса Рәсәй Конституцияһына ҡаршы килмәй, сөнки ул уҡыусыларҙың төп дөйөм белем һәм артабан юғарыраҡ кимәлдәге белем алыу хоҡуғына ҡамасауламай. Рәсәй Конституция Суды ҡабул иткән ошо ҡарар Рәсәйҙең бөтә субъекттары өсөн берҙәй ҡулланыла, йәғни, милли республикаларҙа үҙ дәүләт телдәрен уҡытыу өсөн әле һүҙ барған юридик документ иң юғары кимәлдәге һәм туранан-тура мотлаҡ үтәлә торған күрһәтмә ролен үтәй (был юриспруденцияла "прецедент хоҡуғы" тип атала).

Иғтибар итегеҙ, йәмәғәт! Был юғары юридик ҡарар шулай уҡ башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу уҡыусының рус телен, математиканы, химияны һәм, ғөмүмән, мәктәптә уҡытылған барса предметтарҙы үҙләштереүе өсөн бер нисек тә тотҡарлыҡ була алмай, тигәнде аңлата

ИЖАДХАНА

**Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим ителеүселәр араһында Башҡортостан юлдаш телеканалы журналисы Гәүһәр Батталованың да исемен күргәс, мәлдән файҙаланып, уның ижадына тағы бер байҡау яһарға ниәт иттем. Эшләгән эштәре ижад һөҙөмтәһен аҡлаймы, исеменә есеме тап киләме? Исеме, тигәндән, гәүһәр - иң ҡиммәтле ҡаҙылмаларҙың береһе, һирәк табыла һәм яҡшылап эшкәртелеп, ваҡыты еткәс мең төҫтәрҙә балҡый торған аҫылташ ул. Гәүһәр Батталованың ижадын ошо аҫылташ балҡыуына оҡшаттым. Бер генә төрлө түгел, йәйгор төҫтәрендә балҡый ул. Тимәк, был журналистың да күп төрлө темаларға мөрәжәғәт итеп, уны төрлө төҫтә балҡыта алыуына аптырайһы түгел. Исеме есеменә тап килә...**



# ИСЕМЕ ЕСЕМЕНӘ ТАП КИЛӘ -

## аҫылташтай балҡыта ул ижадын

### "Алһыу күлдәкле агроном..."

Мәсетле районында уҡытыусылар ғаиләһендә тәүге бала булып тыуған ҡыҙ, халыҡ анында ныҡыған "уҡытыусы балаһы аҡыллы булырға тейеш" тигән ҡалыпты емерер өсөн ниҙәр генә уйлап сығармай, дәрестәрҙә яҡшы баһа алыр өсөн дә тырышмай. "Насар баһаларҙы тик атайым мәрхүм ҡуя торғайны, - тип хәтерләй хәҙер ул үҙенең мәктәп йылдарын. - Ул хеҙмәт, башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәренән белем бирә ине". Бәлки, Тимерхан ағай шул ваҡытта уҡ ҡыҙында сәм уятҡандыр. Сөнки үҙ балаһына талапсан булып, ул уның характеры формалашыуына ла, тырышлығына ла тәүге орлоҡтарҙы һалған. "Шулай ҙа ауылда иң хисле кеше лә атайым булғандыр, - тип һүҙен дауам итә Гәүһәр ханым, - бесәнгә гел уның менән икәүләп йөрөй торғайнык. Шунда ул әсәйемә бер ҡосаҡ сәскә йыйып алып ҡайтыр ине. Йырмоңға маһир булды. Атайымдың сәнғәткә һөйөүе минә лә күскән, мәктәптә уҡығанда уҡ нимә һораһам да алып бирҙеләр: гармун, гитара, мандолина, ҡумыҙ. Шуға хәҙер нимә тотһам, шунда уйнай алам ".

Башҡорт ҡатын-ҡыҙы, бигерәк тә ауыл балаһы аптырап тормай инде ул. Ауылда ат менеп һыбай йөрөһә, аҙаҡ инде мотоцикл эйәрләһә, хәҙер машинаны йүгәнләй. Бәлки, шуға ла үҙен күреп һөйләшмәй, аралашмай тороп, уның күнелен аңлап булмайҙыр. Көслө характерлы, ныҡлы булмышлы Гәүһәрҙең бала саҡта агроном булып, мотоциклда елергә теләүе шуға сәйер ҙә һымаҡ түгел. "Йәм-йәшел үлән, зәңгәр күк, киң быҫыуҙа ал күлдәкле агроном итеп күҙ алдына килтерә инем үҙемде. Мәктәптә уҡығанда шул хәҡтә инша яҙғас, әсәйем уны, исем-шәрифен күрһәтмәй генә өс йыл өлгө итеп күрһәтеп йөрөнө", - ти бөгөн республикала билдәле журналист. Бәлки, тап ошо иншаһы уны журналистика юлынан алып киткәндер ҙә. Ә инде үҫә төшкәс, актриса булыу теләге үҙен һәр ваҡытта ла формала тоторға, тамашасы алдына матур булып сығырға, уларға матурлыҡ өләшергә ярҙам иткәндер. Кем белә, әгәр шул ваҡытта өс турҙы ла үткән ҡыҙ Башҡорт дәүләт сәнғәт институтының театр факультетына уҡырға инһә, бөгөн Башҡортостан юлдаш каналының алтын фондына әүерелгән фильмдар - "Батыр", "Мин үлмәнем, башҡорттар!", "Тыуған яҡҡа ҡайтыу", "Йөрәк" ҡиссаларын ҡарап, телеэкрандар артында тамашасы тетрәнеп, илап ултырыр инеме икән?

Тәүге уңышһыҙлыҡтан һуң документтарын бала саҡ хыялы әйҙәгән уҡыу йортона - Ауыл хужалығы институтына алып барырға була. "Килһәм, тик егеттәр. Бүлмәлә йәшәргә лә ҡыҙҙар булмаҫ, тинем дә, документтарымды БДУ-ға алып барып тапшырҙым", - тип көлөп хәтерләй ал томандар артында аҙашып ҡалған хыялы хаҡында ул.

### "Боҙло һыуға батманың, балаҡай..."

Башҡорт дәүләт университеты филология факультетының башҡорт-рус бүлеген тамамлағандан һуң яҙмыш Гәүһәрҙе мәктәпкә алып бара. Әммә ул, бер ни тиклем балаларға белем биргәндән һуң, булмышының икенсе өлкәлә булыуын аңлай. Мәғариф министрлыға инеп, мин мәктәптә эшләй алмайым, минеке түгел был һөнәр, журналист булыр инем, тип белдерә. Ул ваҡыттағы министр Сәбилә Сөләймәнова уның ҡыйыулығына хайран ҡалғанмы, мотлаҡ өс йыл йүнәлтмә буйынса эшләргә тейеш булһа ла, Гәүһәргә фатихаһын бирә.

Ул ваҡыттағы телерадиокомитеттың директоры Динис Бүләков ҡыҙҙың теләгенә ҡаршы килмәй, эшләп ҡара, ти. "Телевидениела көслө етәксе, журналистар командаһында эшләнем. Ғата Имаев, Марсель Ҡотлоғәлләмов күп нәмәгә өйрәтте. Һынау ваҡытында аҙна һайын ике-өс командировкаға сығара инеләр. Илай-илай эшләй инем, әммә көнелдәге сәм бөгөлөргә ирек бирмәне. Һуңынан, һынау ваҡыты үткәс Ғата ағай: "Беҙ бит һине, балаҡай, боҙло һыуға ташланыҡ. Шунан йөҙөп сыға алһа - эшләр, тигәйнек. Батманың", - ти. Әле һаман Имаев та, Ҡотлоғәлләмов та минең остазым булып ҡала, һәр ваҡыт кәңәштәрен биреп тора", - тип хәтерләй ул йылдарҙы бөгөн Гәүһәр Батталова.

Башҡа журналистар бер-ике йылда быуынға ултырһа, телевидение журналистары өсөн был ваҡыт кәмендә 10 йылға һуҙыла. Ошо осорҙа Гәүһәр телевидение эшмәкәрлегенең барлыҡ серҙәренә, нескәлектәренә, үҙенсәлектәренә төшөнә: "Мин телевидениеның иң көслө ваҡытына тура килдем. Ул саҡта Әмир Абдразаҡов, Наил Тибеев, Рафаэль Арыҫланов, Әнүәр Нурмөхәмәтов кеүек режиссерҙар эшләй ине. Күп нәмәгә өйрәндем. Ғәзим Шафиҡовтың сценарийы буйынса төшөрөлгән документаль фильмдар, "Кинйә" кеүек республика телевидениеһының алтын фондин тәшкил иткән фильмдар сыҡты. Мин ошо ағайҙарға ҡарап, нисек шулай итеп эшләргә, шулай көслө итеп яҙырға була икән, тип уйлана инем".

### "Тыуған яҡҡа ҡайтыу"

2002 йылда Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек ваҡытында Башҡортостандың тарихи шәхестәре тураһында фильмдарҙың, ҙур күләмле әйберҙәрҙең булмауы асыҡлана. Шунда инде Гәүһәрҙе Төркиәгә командировкаға ебәрергә ҡарар итәләр. "Тап шул командировка минең ысын ижад юлымдың башы булды," - ти ул хәҙер.

Шәхестәрҙе, кешеләрҙе, уларҙың нисек шулай бөйөклөккә күтәрелеүен асыу - ҡыҙыҡ, мауыҡтырғыс процесс. Эшкә тотонорға бер ваҡытта ла ҡурҡманым, хәҙер уларҙы ҡарайым да, нисек баҙнат итеп тотондом икән, тип аптырайым, ти коллегам. Ғөмүмән, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы Зәки Вәлиди үткән һуҡмаҡтар буйлап үтеү, донъяға уның күҙҙәре менән ҡарау - оло тормош мәктәбе ул. "Һуңғы командировкаларымдың береһе Германияға, Зәки Вәлиди йәшәгән ҡалаларға булды, - тип хәтер йомғагын тағата Гәүһәр, әйтерһең дә ҡабат шул юлдарҙан уҙа. - Иң тулҡынландырғаны шул командировка булғандыр. Төрки илдәрендә Зәки Вәлиди юлбашсы кеүек ҡабул итедә, уның исеме барлыҡ ишектәрҙе аса. Немец халҡының, немец ғалимдарының уға мөнәсәбәтен бығаса белмәнек. Германияла ла мөнәсәбәт йылы булыр тип уйламағайным. Аптырап, башҡорт халҡы өсөн ғорурланып ҡайттыҡ.

Минең өсөн иң ҡәҙерлеһе - "Тыуған яҡҡа ҡайтыу" фильмы. Зәки Вәлидиҙең Сталин менән әңгәмәләшеүе, 70 миллион халҡы булған Төркиәне дер һелкетеп тотҡан Ататөрк менән бәхәскә инеүе - үҙе үк уның фекерләү ҡеүәһен, белемлелеген, ил башлығы менән бер кимәлдә тороуын раҫлай. Шул тиклем кеше үҙенең аҡылына, көсөнә ышанырға тейеш. Барлыҡ кеше лә уның һымаҡ була алмай".

Әңгәмәсемдең һөйләгәндәрен тыңлап, уның өсөн үҙ эшендә ваҡ нәмә булмауын аңланым. Журналист өсөн иң мөһиме - намыҫ, яуаплылыҡ, һүҙеңдең һәр кемдең күнеленә барып етерлек эҙләп табыу. Бәлки, шуға ла Гәүһәр үҙ фильмдарын ҡабат-ҡабат ҡарай. Ҡайһы бер урындары менән килешмәй, эх, бына был урынында шулай итергә кәрәк булған, тип анализлай. Тимәк, киләһе фильмдарҙа ваҡ һына етешһеҙлектәргә лә юл ҡуйылмаясаҡ. Ғәмәлдә, бер фильмды эшләү өсөн уға йылдар дауамында әҙерләнә ул. Зәки Вәлиди тураһындағы фильм тыуғы йыл күңелдә йөрөп донъяға килә. "Ҡайһы бер матур идеялар төшөмә инә, хәҙер уларҙы төн уртаһында булһа ла ҡағыҙға теркәп ҡуям. Ижад эше үҙенә һурып алһа, уйлаған әйберең күнелеңдә тулышып, тулғаҡлап донъяға тыуған сабый кеүек һыҙланыуҙар, ғазаптар, күҙ йәштәре аша донъяға килә", - ти ул. Юҡҡамы ни уның фильмдарын тамашасылар ҙа күҙ йәштәренеҙ ҡарай алмай. Тимәк, режиссерҙың, авторҙың хис-тойғолары тамашасының күнеленә инеп, уның иң нескә ҡылдарын тирбәлергә мәжбүр иткән, битараф ҡалдырмаған. Тамашасың талабына тап килгән фильм ижад итеү үҙе ҙур бәхет, үҙе ҙур баһа түгелме ни?

### "Мин үлмәнем, башҡорттар!"

Гәүһәрҙең һәр фильмының үҙ тарихы, үҙ яҙмышы. Салауат Юлаев тураһындағы "Мин үлмәнем, башҡорттар!" ҡиссаһын эшләргә уға тыуған яғының тәбиғәте этәргес бирә. Тыуған районына ҡайтыр юлы Салауат районы аша үткәнлектән, ул гел генә, Салауат ошо ерҙән үткән, ошо йылғаның һыуын эскән, ошо ерҙә ултырып ял иттеме, ошо түбәләскә баҫып ҡурай уйнанымы икән, тигән уйҙарға сорнала. Ә инде Иҙристәге Салауат мәмерйәһенә барғас, уның фильм төшөрөү тураһында бер шиге лә ҡалмай. Хатта төп ролгә артистар һайлап ваҡыт та үткәрмәй, бер нисә тапҡыр Рәсәйҙең иң көслө кешеһе титулына эйә булған Эльбрус Ниғмәтуллинда туҡтала. Шулай итеп, бер юлы ике ҡуянды ата ул. Салауатты ла данлай, йәштәрҙе Эльбрус кеүек булырға ла өндәй. "Башҡорт халҡының батырҙары күп, әммә тарих ыҙалар күреп тә баш эймәгән, бирешмәгән, тормош һынауҙары алдында тубыкланмаған кешеләрҙе үҙенә кумир итеп һайлай, тиген фекергә килдем, - ти Гәүһәр Тимерхан ҡыҙы. - Салауат та бит дөйөм алғанда бер йыл ғына батша ғәскәренә ҡаршы көрәшә, ә 25 йыл ғүмерен шул көрәш өсөн хаҡ түләп үткәрә. Бының өсөн күпме рух ныҡлығы, таҙалыҡ кәрәк!"

### "Йондоҙ булып осто йөрәк..."

Кемдәр, бәлки, арттырыу тиер, әммә Гәүһәр менән әңгәмәләшкәндә, уның хис-тойғолар ауралына сорналып, үҙендә уның эргәһендә фильм төшөрөп йөрөгәндәй хис итәһең, ҡолағында бөркөттәр саңҡыуы, йылғалар ағышы, урман шауы ишетелгәндәй була. Рәшит Назаров тураһында һүҙ сыҡҡас, әңгәмәсем уның "Йөрәк" исемле шиғырын яттан һөйләп ебәрҙе. Күҙҙәрендә - моңһоулыҡ та, һоҡланыу ҙа сағылды шул саҡ. "Уйлайым да, ябай кеше шундай шиғыр ижад итә алмайҙыр ул, тип һығымта яһайым. Моғайын, Юғары көс уға башҡаларға бирелмәгән көслө һәләт биреп, аҙаҡ уны кире алғандыр, тием. Ябай ер кешеһе ундай шиғыр ижад итер инеме ни? Ярай әле үҙе тере ваҡытта фильм эшләп ҡалдыҡ ", - ти ул үҙе. Ә инде фильмды тамашасы хөкөмөнә сығарыу алдынан, шағирҙың кисерештәрен аңлар өсөн бер йыл буйы Интернеттан аяуһыҙ сир тураһында мәғлүмәт туплай, психологтар, психотерапевтарҙың яҙмаларын уҡып, уны аңларға тырыша, ләкин бер ниндәй һығымта алмай. "Рәшит Назаровтың шиғырҙарын Башҡорт дәүләт университетында ҡулдан-ҡулға йөрөтөп күсерә инек. Шул йылдарҙан уҡ мин уның шиғриәтенә ғашиҡ. Әммә фильм төшөрөүгә егерме йыл үткәс кенә әҙер булдым. Хәҙер шул фильмды ҡараған һайын илайым..."

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына республиканың иң арҙаҡлы ул-ҡыҙҙары иң яҡшы хеҙмәт ҡаҙаныштары өсөн дәғүә итә. Гәүһәр Батталова ошо арала ғына телевидениеның алтын бағанаһы булырлыҡ әллә күпме мираҫ ижад итте. Киләсәктә Рәми Ғарипов, Кинйә Арыҫланов, Нәфисә Вәлидова, бала саҡ хыялы булып ҡалған, әммә ғүмер буйы уны оҙатып килгән ал күлдәкле агроном ҡыҙ тураһында фильмдар төшөрөү ниәте менән яна. Кеше үҙенең исемен аҡларға, уға тап килергә тейеш, тиҙәр. Был йәһәттән Гәүһәр Тимерхан ҡыҙы башын юғары сөйөп, милләттәштәренең күҙенә тура ҡарарға ла хоҡуҡлы. Уның фильмдары халҡы күнелендә урын тапты, һәр ҡиссаһы авторҙың исемен яҙы төҫ менән, сағыуыраҡ балҡытты. Ябай таш түгел ул гәүһәр - аҫылташ!**



**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

✔ *"Кипкән ағасҡа ҡош ҡунмай икән" - ҡатын ҡапыл ғына үҙен ошо ҡарт, бер нәмәгә яраҡһыҙ ҡороған ағасҡа оҡшатып, асыш яһаны. Зәбирәнең тормошо, ысынлап та, ағастыҡына шаҡтай оҡшаш ине.*



ИНТЕРНЕТТАН



## КӨҘ МИҘГЕЛЕНДӘ ЛӘ... ял мөһим

■ Көньяҡ Дания университеты ғалимдары, яҡшы үҫешкән илдәрҙә тыуған балаларҙың ғүмер оҙайлығы 100 йәшкә тиклем етәсәк, тип белдерә. Статистик тикшеренеү һөҙөмтәләре буйынса, 1950 йылда 80-90 йәшкә тиклем етеү мөмкинлегенә эйә ҡатын-ҡыҙ уртаса 16 һәм ир-ат 12 процент булһа, 2002 йылда был һан ҡатын-ҡыҙҙар өсөн - 37, ә ир-егеттәр өсөн 25 процентҡа еткән. Тикшеренеү авторы әйтеүенсә, ғүмер оҙайлығы 1840 йылдан бирле артыуға табан үҫеш кисерә һәм әлегә тиклем был процесс туҡтағаны юҡ. Мәғлүмәттәргә ярашлы, оҙаҡ йәшәүселәрҙең 40 проценты башҡаларҙың ярҙамынан тыш та донъя көтә ала, тимәк, бөгөнгө көндәге оло кеше ситтәрҙең ярҙамына артыҡ мохтаж түгел. Ғүмерҙе оҙайтыусы факторҙарға сабыйҙар үлеменең ҡыҫҡарыуы, инфекцион сирҙәрҙең кәмеүе, табиптарҙың йөрәк-ҡан тамырҙары һәм онкологик сирҙәрҙе булдырмау өсөн ваҡытында профилактик саралар күреүе, йәшәү кимәленең яҡшырыуы инә.

■ АҠШ-тың Ижтимағи ҡыҙыҡһыныуҙар фәнни үҙәге тарафынан ағыуланыу хәүефе күберәк булған аҙыҡ-түлек исемлеге төҙөлгән. Был ни тиклем сәйер яңғырамаһын, исемлектең башында йәшел тәмләткестәр тора. Быны сәбәбе - һуған, әнис һәм башҡа тәм биреүсе үҫемлектәрҙе яҡшылап йыумайынса ашауҙа. Икенсе урында йомортҡа тора. Иҫкергән йомортҡа ҡулланыу 95 процент осраҡта ағыуланыуға килтерә. Өсөнсө урында - картуф. Дөрөҫ эшкәртмәү сәбәпле, балыҡ менән ағыуланыусылар һаны ла юғары ғына. Егерме аҙыҡ-түлек исемлегенә шулай уҡ помидор, сыр, диңгеҙ продукттары ингән.

■ Гүзәл зат көн һайын биткә һөртә торған 13 төрлө косметик продукт ҡуллана, уларҙың күбеһендә 20-нән артыҡ төрлө химикат бар. Ирен буяуында химик ингридиенттар күләме яҡынса - 33, тире өсөн лосьондарҙа - 32, туште - 29, ҡул өсөн кремда 11 процент. Ҡайһы бер биҙәнеү әйберҙәрендә химикаттар күләме 400-гә етә.

■ Әле күптән түгел генә табиптар йәйге эҫенең психик һаулыҡҡа насар тәьҫир итеүе тураһында белдергәйне. Көҙ - миҙгел депрессиялары киҫкенләшкән мәл, шуға ла эш араһында ял итеп алырға онотмағыҙ, тип иҫкәртә Сербский исемендәге Психиатрия үҙәге етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Зураб Кекелидзе. Был миҙгелдә йоҡо режимын һаҡлау бигерәк тә мөһим. Артыҡ эшкә бирелгән кеше - насар хеҙмәткәр, ти Кекелидзе һәм аҙнаһына бер көн булһа ла ял итергә саҡыра.

■ Етен орлоғо кеше, бигерәк тә ирҙәр организмы өсөн файҙалы. Айова дәүләт университеты эргәһендәге Тикшеренеү үҙәге ғалимдары әйтеүенсә, етен орлоғо ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, етен орлоғонда булған химик матдә - лингнин ҡатын-ҡыҙҙар ҡаны торошон бер нисек тә үҙгәртә алмай икән. Ғалимдар быны лингнин тәьҫиренә тестостерондың йоғонтоһо менән аңлата. Иратҡа көнөнә 3 ҡалаҡ етен орлоғо ҡабул итеү холестерин концентрацияһын 10 процентҡа түбәнәйтергә мөмкинлек бирә.

■ Сәстәрҙең иртә саллаңыуында эш урынындағы стресс һәм башҡа сәбәптәр генә түгел, ә төрлө диеталар һәм итле аҙыҡты аҙ ашау гәйепле. Сәстең иртә саллаңыуының иң киң таралған сәбәбе - тирозин аҡһымынның етешмәүе. Ул башлыса ит һәм майҙа осрай, шуға ла диетала ултырыусылар һәм ит ашамаусылар быға йышыраҡ дусар була. Тулы булмаған рационда тирозин һәм баҡыр етешмәй, ә тап улар буяусы пигменттар барлыҡҡа килеүенә яуап бирә. Шуға ла яңы ғына бер нисә килограмм ауырлығынан ҡотолған кеше яңы проблемаға тап булыуы ихтимал.

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

# КҮРШЕ БАҠСАҺЫНА ЫРҒЫТҠАН ТАШ...

## үҙеңә кире ҡайта, ишәйеп



**Һуңғы осорҙа көнө буйы башын тәҙрә быялаһына терәп ултырһа ла, баҡсаһындағы тирәктең быйыл бөтөнләй япраҡ ярмауын йәй башында ғына күреп ҡалды Зәбирә. "Шундай мөһәбәт ағас та ҡороғас..." - тип, ихлас гәжәпләнде әбей.**

Өй һалып ингәс тә, Мирхәте тирәкте бысып ташлап, тамырҙарын ҡаҙып ырғытырға уйлағайны, Зәбирә ҡырҡа ҡаршы төштө. "Ауылда бер кемдә лә тирәк үҫмәй, ултырһын, йортобоҙ әллә ҡайҙан күренеп торор, кем йәшәй - шул йәшәй тиһендәр" - йәштән башҡаларҙан өҫтөнөрәк булырға, айырылыбыраҡ торорға тырышты ул. Ауылда, ысынлап та, башҡа бер кемдең дә баҡсаһында тирәк үҫмәй. Ғөмүмән, был төбәктә емеш ағастарына өҫтөнлөк бирәләр. Зәбирәләр ҙә тәүҙә алмаһын да, муйылын да, миләшен дә ултыртып ҡараны. Тик тирәк башҡаларға үҫергә ирек бирмәне. Баҡсаға ғына түгел, бөтә донъяға хужа булырға теләгәндәй, тирә-яҡҡа тарбайып үҫте лә китте. Тәүҙә унын йәш, көслө ботаҡтары ҡыуаҡтарға үҫеп нығынырға ҡамасауланы. Ҡояштың йылы нурҙарын да, ямғыр тамсыларын да үҙенән үткәрмәне. Һуңынан олоно һимаҡ йыуан тамыры бөтә баҡсаны баҫып алды. Үҙҙәренең генә түгел, хатта күршеләренең өй баҙына тиклем сығып, аҙын иҙән аҫтына һыу индереп маҙаһыҙланы. Сәскә атып, мамығын осора башлағас, үҙе лә, күрше-тирәһе лә күпме этлек күрҙе. Бер йылды күршеһе йорт-ҡаралтыһыҙ ҡала яҙҙы. Йыйылып яткан тирәк мамығына бала-саға шырпы сыйған да ебәргән. Ярай әле шунда уҡ күреп ҡалып, һүндерә һалдылар.

Тирәккә оя ҡорған ҡарғаларҙан күргән зыянды иһә әйтеп торорға ла түгел. Бигерәк тә ҡаҙ-өйрәк бәпкәләрен урлап йонсота ине улар. Тик ни гәжәп: Зәбирәнең себештәренә ҡағылманы ҡоштар. Әллә ҡатын берәй ырымын белде, әллә ҡоштар үҙҙәре зирәк булды - кемдең ағасында ултырыуын аңлап, ихаталағы себештәргә яҫҡынманы. Һәр хәлдә лә, Зәбирә көҙөн себештәрен теүәл һанай ине.

"Кипкән ағасҡа ҡош ҡунмай икән" - ҡатын ҡапыл ғына үҙен ошо ҡарт, бер нәмәгә яраҡһыҙ ҡороған ағасҡа оҡшатып, асыш яһаны. Зәбирәнең тормошо, ысынлап та, ағастыҡына шаҡтай оҡшаш ине. Баҡсаһындағы тарбайған ағас кеүек үк, ҡолас ташлап, бөтә нәмәне ялмап алырға теләгәндәй, донъя көтөргә тырышты. Күршетирәһенән артыҡ булһа булһын, кәм булмаһын, тип сәмләнеп, ярышып йәшәне. Иренең туғандарын үҙҙәренән биҙҙертеп бөттө. Һәр ваҡыт әр, зар, ҡәнәғәтһеҙлек кенә ишетелеп торған йортҡа, дөрөҫөн әйткәндә, бер кемдең дә барғыһы килмәне.

Башҡаларҙыҡынан ҙурыраҡ, эрерәк булһын, иртәрәк өлгөрһөн, тип, ваҡытынан алда ултыртҡан йәшелсәһен йә ҡырау һуҡһа, йә сибек, йә ауырыу булып үҫһә лә бәхетһеҙлеккә тинләне. Малайҙары шаярып, яңылыш берәй ерен имгәтһә, йә мәктәптән ике йәки иҫкәртмә алып ҡайтһа, бәлә килде, тине. Һәм быларҙың бөтәһендә лә ирен гәйепләне. "Бөтә бәхетһеҙлектең, уңышһыҙлыҡтың башы һинең минә никах булләгән бирмәүеңдә", - тине. Балаларының атаһы тәүге пенсияһын да алмай, гүр эйәһе булғас та, уны күп иҫенә төшөрҙө ул. Утыҙ йылға яҡын бергә йәшәгән осорҙа ире әллә күпме затлы әйбер бүләк итһә лә, Зәбирәнең күңеле мәһәр көсөнә.

Зәбирә быйна ете-һигеҙ йыл инде япа-яңғыҙы. Балаларын атаһы ғына тотоп торған икән, уны ерләп, өс-дүрт ай үтеүгә, тәүҙә олоһо, шунан кесеһе сит тарафҡа китеп олаҡты. Тәүҙәрәк йылына бер тапҡыр булһа ла ҡайтып күренеп, шылтыратып, хәл-әхүәлләштереп торһалар, хәҙер оноттолар. Шуға ла көндәренең күбеһе ошо тәҙрә төбөндә үтә ҡарт әсәнең. Ике улы бер-бер артлы әрме сафына алынғас: "Тәҙрә быялаһы һалҡыны эстәге ут-ялҡынды баҫа, ҡыйын саҡта маңлайыңды тәҙрәгә терә", - тигәйне әсәһе. Йәш саҡта уға әһәмиәт бирмәһә лә, хәҙер иһә унын, ысынлап та, шулай икәнлегенә төшөндө. Тәҙрә - уның берҙән-бер йыуанысы бөгөн. Урамдан йә шикләнеп, йә көлөп үтеүселәргә лә иғтибар итмәй ул, үҙ уйы башынан ашҡан.

Тирәк кеүек шәп саҡтарын һағына хәҙер Зәбирә. Мөмкин булһа, икенсерәк йәшәр ине, моғайын. Олоғайғас, кәре ҡайтҡас, дөрөҫөрәге, яңғыҙ ҡалғас ҡына төшөндө: яуыҙлыҡ яуыҙлыҡ тыуҙыра. Изгелек изгелек булып ҡайта. Күрше баҡсаһына ырғытҡан ташының артып ҡайтыуын да әле генә белде. Мирхәтен ғүмер буйы рәнйетеүен аңлаған көндө ҡулына тәү тапҡыр тиҫбе алды. Кисереүен һораны. Мәһәр бирмәнең, тип ғүмер буйы тынғыһыҙланы ирен. Тәүҙә үҙенә генә төрттөрҙө, һуңынан туғандары алдында йөҙөн йыртты. Ниндәй ҙә булһа етешһеҙлеген табып әр һалырға әҙер торҙо. Ир уртаһы йәшенә етер-етмәҫтән ҡарашын ерҙән алмай, башын баҫып, бөкөрәйеп атларға күнекте ире шуға ла. Ир хаҡын уйламаған. Әле шуның әжерен күрә...

**Район ауылдарының береһендә күреп һөйләштем мәҡәләм геройы менән. Шап-шаҡтай йорт янындағы ҡоро ағасҡа иғтибар йәләп итеп ингәйнем. Ә ҡатын яҙмышын ни өсөн һөйләйемме? Ғибрәт өсөн. Һис юғында, үҙ баҡсағыҙҙағы ташты күрше баҡсаһына ырғытмағыҙ, тип әйтер өсөн...**

Лена АБДРАХМАНОВА.

ҺҮҘ АРАҺЫНДА...

# ҠАЙҺЫ РИЗЫҠ...

## кәйефте күтәрә?

**Ашаған ризыҡтарыбыҙ сәләмәтлегебеҙгә генә түгел, күңел торошобоҙға ла тәьҫир итә. Ҡайһы бер аҙыҡтарҙағы витаминдар һәм микроэлементтар "шатлыҡ гормон"ы бүлеп сығарырға ярҙам итә, күңелде күтәрә. Шуға ла күңел торошоғоҙға тап килгән аҙыҡ һайлап ашаһағыҙ, һәр ваҡыт үҙегеҙҙе яҡшы тойорһоғоҙ.**

Ҡыйын булған сағығыҙҙа ҡулығыҙ ҡайһы аҙыҡтарға ынтыла, иҫләгеҙ әле? Дөрөҫ, тәмле-татлыға! Ә бөтөнләй көс булмағанда нимә ашағы килә? Әлбиттә, ит!

Стресты баҫа: майлы балыҡ (һөмбаш, макрель, сардина һәм анчоус), әстрхан сәтләүеге, көнбағыш һәм авокадо.

Сере нимәлә? Бөтә был ризыҡтар ҙа файҙалы омега-3 - тәбиғи антидепрессант май кислоталарына бай. Күп төрлө тикшеренеүҙәр, организмдарында омега-3 кислоталары булған кешеләр стресҡа артыҡ бирелеп бармай икәнлеген күрһәтте.

Дәртләнергә ярҙам итә: ҡыҙыл ит, күрәгә, брокколи һәм башҡа ҡара йәшел йәшелсәләр, икмәк, яҫы борсаҡ һәм ҡыҙыл фасоль.

Сере нимәлә? Был аҙыҡтар - иң яҡшы тимер сығанағы. Ул ҡанда гемоглобин кимәлен күтәрер өсөн бик кәрәк (ә был энергия һәм дәрт артыуға булышлыҡ итә). Әйткәндәй, иттәге тимер үҫемлек ризыҡтарынан минералдарҙы үҙләштереүҙе яҡшырта. Шулай итеп, һыйыр итенә иң яҡшы гарнир - йәшелсә салаты.

Оптимизмды күтәрә: шоколад, макарондар һәм һөт ризыҡтары.

Сере нимәлә? Триптофан (был аҙыҡтарҙа булған аминокислота) яҡшы кәйеф һәм гормондар тойғоһон яҡшыртыр өсөн бик кәрәк. Ә фенилэтиламин (шоколад бай булған матдә) мейеләге ҡәнәғәтләнеү үҙәген дәртләндерә, именлек һәм һөйөү тойғоларын көсәйтә.

ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ

**Халҡыбыҙҙың "Һаҡланғанды - һаҡлармын", тигән бер мәҡәле бар. Ә Ҡөрьән-Кәримдә: "Дингә килмәгән халыҡты беҙ юҡ итербеҙ", - тип әйтелә. Бөгөн халҡыбыҙ үҙ диненә, асылына ҡайта, меңәр йыл дауамында килгән рухи ҡиммәттәрен өйрәнә икән, илебеҙгә бәрәкәт, муллыҡ килер, тигән ышаныс бар. Изге Рамаҙан айында бик күп мосолман ҡәрҙәштәребеҙҙең ураҙа ғәмәлдәрен башҡарыуы был ышанысты тағы ла нығыта. Ураҙа байрамы көндәрендә хәбәрсебеҙ Башҡортостан диниә назараты рәйесе мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН менән осрашып һөйләште. Түбәндә беҙ хәҙрәттең ҡайһы бер фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

# ИЛЕБЕҘ ЙӘШӘҺЕН, ТИҺӘК...

## динебеҙҙе йәшәтәйек

### Президент кимәлендә һөйләшеү

Иң тәүҙә шундай ҙур хәбәрем менән уртаҡлашайым: ошо көндәрҙә мине Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ҡабул ҡылды. Ошо вазифаға килгән ваҡытта уҡ Президентыбыҙ үҙенең дингә булған ихтирамын белдереп, киләсәктә бөтә имамдар, дини ойошма етәкселәре менән айырым-айырым һөйләшербеҙ, кәңәшләшербеҙ, проблемаларҙы хәл итербеҙ, тип әйтеп үткәйне. Рөстәм Зәки улы менән осрашыуҙа мин һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда барған дини һәм рухи үҙгәрештәр тураһында бәйән ҡылдым. Хәл ителергә тейешле дини мәсьәләләр тураһында фекер алыштыҡ. Киләсәктә мәҙрәсәләрҙә белем алып йөрөгән студенттарға иғтибар ҙурыраҡ булһа, буласаҡ имамдарҙың торлаҡ мәсьәләләре хәл ителһә, халыҡ араһында дин таратыу, Ислам тәғлимәттәрен аңлатыу, әҙәпле йәш быуын тәрбиәләү эштәре яйға һалыныр ине, тигән теләк белдергәс, Президент киләсәктә дини уҡыу йорттарына айырым иғтибар ҙурыраҡ күрһәтеләсәген, уларҙың статусын күтәреү һәм дини кадрҙар әҙерләү мәсьәләһенә айырым иғтибар бүленәсәген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

### Хәләл ризыҡтар үҙебеҙҙә етештерелә

Бынан бер нисә йыл элек кенә республикабыҙ мосолмандарына хәләл аҙыҡ табыу ҙур ауырлыҡ тыуҙырһа, бөгөнгө көндә, әлхәмдүлилла, был мәсьәлә лә хәл итеслде, тип әйтә алабыҙ. Күптән түгел генә Башҡортостан диниә назаратында Хәләл ризыҡтар етештереү буйынса комитет ойошторолдо һәм ул үҙ йүнәлеше буйынса ҙур эш башлап ебәрҙе. Бөгөн республикабыҙҙың Турбаслы, Мәләүез, Дүртөйлә районларында хәләл ризыҡтар етештерелә. Хатта Белорет ҡалаһының икмәк комбинатында хәләл торт, печеньелар етештерелә башланы. Шулай уҡ хәләл ризыҡтар һатыу буйынса йәрминкәләр ҙә үтеп тора.

Хәләл ризыҡ етештереү ул - милләттең, рухтың сәләмәтлеген хәстәрләү. Республикала етештерелгән хәләл ризыҡтарҙы мосолмандар ғына түгел, башҡалар ҙа яратып һатып ала. Тик хәләл ризыҡ Башҡортостанда ғына түгел, ә Рәсәйҙең күп нөктәләрендә етештерелә һәм улар араһында намыҫһыҙ етештереүсе булыуы ла ихтимал. Шуға ла аҙыҡты алған ваҡытта уның яҙыуына иғтибар итегеҙ. Әгәр ризыҡта "хәләл" тигән яҙыу булһа, һеҙ уны шикләнмәй ала алаһығыҙ. Әгәр "мосолманса", "исламса" тип яҙылһа, ул ризыҡтар ышанысһыҙ, алмауығыҙ хәйерле. Хәләл аҙыҡтарҙың мотлаҡ сертификаты булырға тейеш.

### Мәсеттәр ни хәлдә?

Баш ҡалабыҙҙа урынлашҡан мәсеттәрҙән халыҡ өҙөлмәй, тимәк, мәсет имамдары халыҡ менән яҡшы эшләй, тигән һүҙ. Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙың һәр өсөнсө ауылында мәсеттәр төҙөлдө. Ләкин уларҙа әлегә дин уҡытыу эштәре яйға һалынмаған. Сөнки ауыл мәсеттәренә бер ҡайҙан да килем юҡ, улар тик саҙаҡа иҫәбенә генә йәшәй. Дини уҡыу йорттарында уҡып ҡайтыусы шәкерттәр ҡалаларҙа ҡалырға тырыша. Президентыбыҙ: "Ауыл мәсеттәренә айырым иғтибар бүләсәкбеҙ. Бәлки, киләсәктә ауылдарға ҡайтҡан имамдарға торлаҡ мәсьәләһен дә хәл итербеҙ", - тип әйтеп үткәйне. Ысынлап та, был йәһәттән республика ярҙамы ярап ҡалыр ине. Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк: бөгөн бик күп эшҡыуарҙар, бағыусылар мәсет төҙөй, ләкин ул мәсет өсөн имам әҙерләү мәсьәләһенә иғтибар ителмәй. Мәсет асылыуын асылғас, уны эшләтеүсе етәксеһе, имамы булырға тейеш бит. Әгәр эшҡыуар йә зыялы мәсет төҙөтөр алдынан ошо уҡ ауылдан берәй егетте дини уҡыу йортонда уҡытып алһа, мәсет әҙер булыуға имам да әҙер торор ине.

Республика етәкселәре тарафынан динебеҙгә иғтибар артҡан һайын, халҡыбыҙ уянасаҡ, уйланасаҡ һәм илебеҙ күҙгә күренеп алға барасаҡ, иншалла. Аллаһы Тәғәлә етәкселәребеҙгә был өлкәлә лә ярҙам итһен. Уңайҙан файҙаланып, республикабыҙ мосолмандарын Ураҙа байрамы менән ҡотлайым.

### Мосолман банк карталары

Ураҙа байрамында республикабыҙ мосолмандарын тағы ла бер шатлыҡлы хәбәр менән ҡыуандырырға ашығабыҙ. Башҡортостан мосолмандарының һорауы һәм мөрәжәғәттәре буйынса БР Диниә назараты мосолман банк карталары сығарырға ҡарар итте һәм үҙенең тәҡдимен "АФ Банк" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенә белдерҙе. Ниһайәт, бөгөн республикабыҙҙа шәхси капитал күләме буйынса Башҡортостанда иң эре банктарҙан һаналған "АФ Банк" асыҡ акционерҙар йәмғиәте мосолмандар өсөн пластик банк карталары сығара башланы. Мосолмандар өсөн бындай карталар Рәсәй банк системаһында тәүге тапҡыр сығарыла. Хәҙер мосолмандар карта иҫәбен тулыһынса шәриғәт ҡанундарына ярашлы асыу мөмкинлегенә эйә булды. Мәҫәлән, быға тиклем банктарҙа карта алғас та, үҙенең иҫәбенә күсәсәк проценттарҙан баш тартып ғариза яҙыусылар булған. Риба алыу - Ислам динендә иң ҙур гонаһтар рәтенә инә, ә был карта менән ҡулланған мосолмандар бөгөн нәҡ ошо гонаһтан йыраҡлаша ла инде. Мосолман картаһын С. Перовская, 19/1 урамында урынлашҡан банк бүлексәһендә асырға була, бының өсөн тик паспорт ҡына кәрәк буласаҡ. Банк картаһына эш хаҡын, пенсия, стипендия, балалар пособиеһын күсерергә йәки тупланмаға аҡса йыйырға мөмкин. Карта менән тауарҙарға һәм хеҙмәттәргә түләүҙе Ер шарының теләһә ниндәй нөктәһендә ғәҙәти режимда башҡарырға мөмкин. Был йәһәттән мосолман картаһы Хаж ҡылыусылар өсөн ҙур унайлыҡтар тыуҙыра.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Мейе компьютерын нисек программалаштырырға?

**Көсһөҙләнеүҙең оҙон һәм ҡыҫҡа ысулы булған кеүек, программалаштырыу ҙа йылдарға һуҙылырға йәки бер нисә секундта тормошҡа ашырға мөмкин.**

Филипп дини ғаиләлә үҫә. Колледжға уҡырға киткәс, синыфтан тыш саралар сиркәүгә йөрөүҙе оноттора. Колледжды тамамлағас, ул сауҙа өлкәһендә эшләй башлай. Тиҙҙән ғашиҡ була һәм өйләнә. Хәҙер инде ғаилә һәм эш Филиптың ваҡытын күпләп алып, күңеле тураһында уйларға уның ваҡыты ҡалмай. Шулай итеп, 10 йыл ваҡыт үтә. Филипп етди сирләп китә. Операция һәм реабилитация осорон үткәрә. Ошо еңел булмаған ваҡытта ул үҙенең эшен юғалта, ҡатыны ташлап китә. Хәҙер инде уға тормош тураһында уйланырға бер нәмә лә ҡамасауламай.

Бер нисә йылдан һуң мин Филипты сиркәү баҡсаһында ҡабаттан осраттым. Аш янында ул: "Эшҡыуарлыҡ һәм күңел асыуҙар мине шул тиклем йотто, мин хатта рухи көрсөккә килеп терәлеремде лә күҙ алдыма килтермәнем, - тип, күңелен асып һалды. Ә нимә уны үҙгәрергә мәжбүр итеүен һорағас, ул: "Мин Норман Винсент Пилдың "Сила позитивного мышления" тигән китабын уҡыным. Ул мине тормошта ҡәнәғәтлек килтергән тәрән, бер ваҡытта ла үҙгәрмәгән ҡиммәттәргә яңыса ҡарарға мәжбүр итте", -тине.

Бөгөн Филипп - бизнес-консультант. Ул элеккегә ҡарағанда аҙыраҡ көсөргәнеш кисереп, күберәк аҡса эшләй, сиркәү хорында йырлаған ҡатынға өйләнгән. Филипп ҡабаттан программалашыу үткән. Бының өсөн уға йылдар кәрәк булған. Донъяға ҡарашы киренән ыңғайға үҙгәргән.

Һеҙ быны тиҙерәк эшләй алаһығыҙ. Бының өсөн бер нисә секунд кәрәк. Шундай күнекмәләр яһағыҙ: яҡшылап ултырығыҙ ҙа күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ; өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ; бер нисә картинаны күҙ алдына килтерегеҙ; дүрт тапҡыр аффирмацияны (ыңғай йүнәлеш) ҡабатлағыҙ;уйығыҙҙа ғына үҙегеҙгә: "Мин күтәренке кәйефтәмен, үҙемде элеккегә ҡарағанда ыңғай интылыштa тоям", - тип ҡабатлап, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Нимә һуң ул аффирмация? Ул ниндәйҙер маҡсат ҡуйып әйтелгән раҫлау. Бына бер нисә миҫал: **"Мин барлыҡ мөнәсәбәттәрҙә лә ыңғай ҡарашлы булa барам". "Мин һәр эште ҡурҡыуһыҙ ҡабул итәм һәм уның уңышлы барып сығыуына иҫәп тотам". "Мин үҙемдә ихтирам итәм. Мин - һөҙөмтәле ижади шәхес".**

Ошо миҫалдарға нигеҙләнеп, үҙ аффирмацияғыҙҙы уйлап сығара алаһығыҙ. Улар ыңғай уйлауға, үҙ-үҙеңде ихтирам итеүгә, уныш ҡаҙаныуға йүнәлтелгән булырға тейеш. Артабан беҙҙең аффирмациялар - мейе компьютерын ҡайтанан программалаштырыуҙың ябай формаһы - ниндәйҙер аныҡ етешһеҙлекте еңеп сығыуға йәки кәрәкмәгән ғәҙәтте бөтөрөүгә йүнәлтелергә тейеш.

Күп йылдар дауамында мин кешеләрҙең түбәндәге ике төрлө йүнәлеш ярҙамында нисек үҙгәреүен күҙәтәм: **"Мин бер ҡасан да пессимист булмаясаҡмын. Мин - оптимист. Мин бер ваҡытта ла уңышһыҙлыҡтан ҡурҡып, көйәләнмәйәсәкмен. Мин бөтә нәмәлә лә уңышҡа иҫәп тотасаҡмын".**

Ошо аффирмацияны көнөнә өс тапҡыр өс көн ҡабатлағыҙ. Дүртенсе көнгә уны түбәндәгесә үҙгәртегеҙ: **"Хәҙер мин пессимист түгел һәм тынысһыҙланып бармайым. Мин оптимист. Мин бар нәмәлә лә уңышҡа өмөт итәм".**

Был аффирмацияны көнөнә өс тапҡыр өс көн дауамында ҡабатлағыҙ. Хәҙер инде һеҙгә мейе компьютерығыҙҙы ҡайтанан программалау өсөн уға мөрәжәғәт итергә кәрәкмәй. Һеҙ программалланғанһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әл-Фәттәәхү** - бәндәләренә рәхмәт ҡапҡаларын асыусы, билдәле булмағандарҙы асып, белем биреүсе. Кешеләрҙең йөрәктәренә Аллаһы Тәғәләгә ҡарата ихтирам, һөйөү һәм Унан ҡурҡыу тойғоларын асыусы. Был исемде даими ҡабатлап торған бәндәнең күңеле раушан (нурлы) була.

**Әл-Ғәлииму** - һәр нәмәне яҡшы белеүсе. Белеме Унан өҫтөн һис кем юҡтыр. Ул барса булған нәмәләрҙе лә белә. Уйлаған уйҙарҙы, ниәттәрҙе белә. Ул ситтән бер ниндәй ҙә мәғлүмәт алмай, бөтә белем һәм ғилем Уның үҙенән генә килә. Ул нимә булғанын һәм нимә буласағын белә. Был исемде йыш ҡабатлаған кеше ғилемгә еңел өйрәнер һәм белгәнен онотмаҫ.

**Әл-Ҡаабиду** - үҙенең ғәҙел хөкөмө буйынса ғәйеплеләргә яҡшылыҡты кәметә, тәкәбберҙәрҙең үҙенә буйһонмаусылыҡтарын юҡҡа сығара. Ғазраил фәрештәгә йән алырға фарман биреүсе. Даими рәүештә был исемде ҡабатлаған кешегә Аллаһы Тәғәлә үҙенең рәхмәтен бирер.

**Әл-Бәәситү** - ризыҡ һәм хәятты киң итеп биреүсе. Байҙарға ла, ярлыларға ла бай ниғмәттәрен йомартлыҡ менән биреүсе. "Йәә Бәәситү" тип ун мәртәбә уҡып, йөҙөн ҡулдары менән һыйпаһа, бер кемдән дә мохтажлыҡта булмаҫ.

**Әл-Мүғиззү** - ҡеүәтләндереүсе, көс биреүсе заттыр, теләгәндәргә еңеү биреүсе. Дүшәмбе йә йома кистәрендә намаҙҙан һуң мосолман йөҙ ҡырҡ мәртәбә был исемде уҡыһа, көслө һәм ғәйрәтле булыр. Аллаһы Тәғәләнән башҡа заттан ҡурҡмаҫ.

**Әл-Мүзиллү** - теләгән бәндәһен хур итеүсе, түбәнәйтеүсе, мәсхәрә итеүсе, еңеү көсөнән мәхрүм итеүсе.

Залимдарҙан ҡурҡҡанда, был исемде етмеш биш мәртәбә уҡып сәждә ҡылһа, "Йә, Раббым, фәлән кешенең яуызлығынан имен ҡыл", тиһә, Аллаһы Тәғәлә бәндәне һаҡлар.



## 13 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
10.20 "Знакомство с родителями"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Семейный дом", 9-я серия. Драма
22.30 "Артем Боровик. Он очень торопился жить"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Особое поручение"
00.50, 03.05 "Разум и чувства". Мелодрама
03.00 Новости
03.30 "Спасите Грейс"
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Люди-обезьяны. Секретные опыты доктора Иванова"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь". Док. драма
15.35 "Каменская"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 137-я серия
18.05 "Ефросинья", 146-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "В лесах и на горах", 1-я, 2-я и 3-я серии. Историческая мелодрама
23.50 "Вести+"
00.10 "На опасной земле". Боевик
03.45 "Честный детектив"
04.20 "Городок"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
11.00 "Следствие вели..."
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Футбольная ночь"
01.45 "Заброшенный дом"
03.45 "Школьные джунгли"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Псковская область". Этногеографический сериал**
**13.00 "Хрустальный соловей" (на башк. яз.)**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.50 "Историческая среда"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Деловой форум"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Российское кино на канале БСТ**
**01.00 Прогноз погоды**

## 14 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
10.20 "Знакомство с родителями"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Семейный дом", 10-я серия
22.30 "Спецрасследование"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50, 03.05 "Хозяин морей. На краю земли"
03.00 "Новости"
03.20 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 138-я серия
18.05 "Ефросинья", 147-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "В лесах и на горах", 4-я, 5-я и 6-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Китайский сервиз"
02.10 "Горячая десятка"
03.20 "Большая любовь-3"
04.25 "Городок"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Город соблазнов". Сериал
02.15 "Главная дорога"
02.50 "Округ Рэйнтри". Мелодрама

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 Детский фильм**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Алтай". Этногеографический сериал**
**13.05 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**13.20 Ретро-концерт (на башк. яз.)**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.45 Мультсериал "Наруто"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.25 Открытый чемпионат России - Чемпионат МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Реактор" (Челябинск). Прямая трансляция**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.20 Художественный фильм**
**01.00 Прогноз погоды**

## 15 СЕНТЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.10 "Жить здорово!"
10.20 "Знакомство с родителями"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Семейный дом", 11-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50 "Тайное окно"
02.40, 03.05 "Воспитание Аризоны"
03.00 "Новости"
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Прощание с "Песняром". Владимир Мулявин"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 139-я серия
18.05 "Ефросинья", 148-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "В лесах и на горах", 7-я, 8-я и 9-я серии
23.50 "Вести+"
00.10 "Повторная любовь". Трагикомедия
02.25 "Джордж Уоллас"
03.20 "Люди в деревьях-2"
04.15 "Городок"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
22.20, 23.25, 03.10 "Город соблазнов". Сериал
23.15 "Сегодня"
00.30 Футбол. Лига Чемпионов УЕФА. "Марсель" (Франция) - "Спартак" (Россия)
02.40 "Лига Чемпионов УЕФА. Обзор"
04.15 "ОНО"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 Детский фильм**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Республика Карелия". Этногеографический сериал**
**13.05 "Байык". Телевизионный конкурс любителей башкирского танца**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественный фильм**
**16.45 Мультсериал "Наруто"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 Новости (на башк. яз.)**
**18.25 Открытый чемпионат России - Чемпионат МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Реактор" (Челябинск). Прямая трансляция**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм**
**01.00 Прогноз погоды**

## 9 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Жить здорово!"
10.20 "Знакомство с родителями"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Семейный дом", 12-я, закл. серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Обмани меня"
00.40 "Милашка"
02.10, 03.05 "И восходит солнце"
03.00 "Новости"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 140-я серия
18.05 "Ефросинья", 149-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "В лесах и на горах", 10-я и 11-я серии
22.50 "Поединок"
23.50 "Вести+"
00.05 "Настоящее преступление"
02.50 "Джордж Уоллас"
03.50 "Люди в деревьях-2"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.25 "Морские дьяволы". Сериал
21.20 "Глухарь". Сериал
22.20, 23.55 "Город соблазнов". Сериал
00.50 Футбол. Лига Чемпионов УЕФА. "Андерлехт" (Бельгия) - "Зенит" (Россия)
03.00 "Лига Чемпионов УЕФА. Обзор"
03.30 "Особо опасен!"
04.05 "ОНО"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 Этногеографический сериал "Удмуртия"**
**13.00 "Тэмле"**
**13.25 "Любимые мелодии" (на башк. яз.)**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.50 Мультсериал "Наруто"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Байман" (на башк. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Действующие лица"**
**19.30 "Историческая среда"**
**20.00 "Наш дом - Башкортостан"**
**20.30 "Сэнгелдек" (на башк. яз.)**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Шедевры мирового кинематографа**
**01.00 Прогноз погоды**

## 17 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.10 "Жить здорово!"
10.20 "Знакомство с родителями"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Большая разница" в Одессе"
23.20 "Перевозчик". Боевик
01.00 "Дорога в рай". Военная драма
03.10 "Месть"
05.05 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.10 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 141-я серия
18.05 "Ефросинья", 150-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Евгений Петросян. 65 - юбилей опять!"
00.40 "Кинозвезда в армии". Комедия
02.50 "Джордж Уоллас"
03.45 "Люди в деревьях-2"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Мама в большом городе"
09.00 "Чудо-люди"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.25 "Спасатели"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Глухарь в кино". Комедия
21.20 "Необыкновенный концерт с Максимом Авериным"
23.15 "Женский взгляд"
00.00 "Влюбленный Шекспир". Мелодрама
02.30 "Букмекерская лихорадка". Драма
04.20 "Черный свет"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Судьба". Программа Магнитогорского ТВ (на башк. яз.)**
**13.00 "Любимые мелодии" (на башк. яз.)**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.50 Мультсериал "Наруто"**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Йома" (на башк. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Барыс" (Астана) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Криминальный спектр"**
**23.20 Киноколлекция Оскар**
**01.00 Прогноз погоды**

## 18 СЕНТЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Мой ласковый и нежный зверь"
06.00 Новости
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Смак"
10.50 "Лев Дуров. Я всегда напеваю, когда хочется выть"
12.10 "Два цвета страсти", 4 серии. Мелодрама
15.00 "Иван Бровкин на целине"
16.50 "Кто хочеть стать миллионером?"
18.00 "Большие гонки"
19.15 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Детектор лжи"
22.15 "Прожекторперисхилтон"
22.50 "Шерлок Холмс: этюд в багровых тонах". Детектив
00.40 "Чужой". Фантастический триллер
02.50 "Исчезающая точка"
04.40" Спасите Грейс"
05.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00 "В зоне особого внимания"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Садко". Сказка
10.20 "Субботник"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Качество жизни"
11.40 "Дела и люди"
11.55 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.15 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Свадьба". Лирическая комедия
16.15 "Субботний вечер"
18.10 "Белый налив". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Белый налив". Продолжение
22.40 "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
23.40 "Девчата"
00.30 "Идеальное убийство". Криминальная драма
02.50 "Зубастики-3". Фильм ужасов
04.35 "Комната смеха"

### НТВ

06.05 "Люди Икс: эволюция"
06.55 "Сказки Баженова"
07.25 "Смотр"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Авиаторы"
09.25 "Живут же люди!"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Лучший город Земли"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Преступление будет раскрыто". Детективный сериал
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа "Максимум". Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.50 "Шпильки". Криминальная драма
21.55 "Ты не поверишь!"
00.55 "Бэтмен". Фантастический боевик
03.35 "Злые и красивые"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 Мультфильм**
**09.25 "Ребятам о зверятах"**
**09.55 "Сельский час" (на башк. яз.)**
**10.20 Н. Гаитбаев. "Мелодия курая". Спектакль Сибайского башкирского государственного театра драмы им. А. Мубарякова (на башк. яз.)**
**11.30 "Судьбы радужные нити" (на башк. яз.)**
**12.00 "Тэмле"**
**12.25 "Доброе сердце"**
**12.55 Открытый чемпионат России - Чемпионат МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Барс" (Казань). Прямая трансляция**
**15.30, 17.35 "Дарю песню"**
**16.40 "Код истории"**
**18.40 "Вестник "Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.25 "Хрустальный соловей" (на башк. яз.)**
**20.30 "Сэнгелдэк"**
**20.50 "Реконструкция подвига. Бородино"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 Хит-парад "Етеган"**
**22.45 "Семейная комедия на БСТ"**
**01.00 Прогноз погоды**

## 19 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Неисправимый лгун"
07.40 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.10 "Тур де Франс"
13.10 "Моя родословная. Виктор Рыбин"
14.00 "Вся правда о еде"
15.00 КВН. Премьер-лига. Финал
16.50 "Московское дело"
18.00 "Лед и пламень". Премьера ледового шоу
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.00 "Южное Бутово"
00.00 Познер"
01.00 "Несколько хороших парней". Криминальная драма
03.40 "Охота на наркоту"

### РОССИЯ 1

05.45 "Человек ниоткуда". Комедия
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.35 "Руки прочь от Миссисипи". Приключения
10.25 "Утренняя почта"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан". Неделя в городе"
11.50 "Городок"
12.20 "Стикс". Детектив
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.30 "Влюбленный Петросян"
16.25 "Смеяться разрешается"
18.15 "Чужие души". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Я счастливая!" Мелодрама
23.00 "Специальный корреспондент"
00.00 "33 веселых буквы"
00.30 "Без изъяна". Криминальная драма
02.45 "Смерть в три дня". Триллер

### НТВ

06.05 "Люди Икс: эволюция"
06.55 "Сказки Баженова"
07.25 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Спето в СССР"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Суд присяжных: главное дело"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Преступление будет раскрыто"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.50 "Дорожный патруль". Детективный сериал
23.50 "Нереальная политика"
00.20 "Футбольная ночь"
00.55 "Елена Троянская". Историческая драма
04.05 "Мумия". Фильм ужасов

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 Мультфильм**
**09.25 "Сулпылар"**
**09.40 "Семер"**
**10.00 "Байтус"**
**10.15 "Артылыш"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.05 "Телекомпас"**
**11.30 "Бабушкин сундучок"**
**12.00 "Тэмле"**
**12.30 "Дарю песню" (на русск. яз.)**
**14.05 "Новое кино"**
**14.30 Художественный фильм**
**15.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Авангард" (Омск) - "Салават Юлаев" (Уфа). Прямая трансляция**
**18.35 "Зеленая жемчужина Башкортостана". Концерт ко Дню работников лесного хозяйства**
**19.40 "Байык"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "В центре внимания"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели**
**22.05 "Вечер.com"**
**22.50 "Приключенческое кино"**
**01.00 Прогноз погоды**

*✓ Юмор һәр саҡ беҙҙең арала. Ул күп ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға, ҡайһы саҡ хәл ителмәҫтәй тойолған проблемаларға башҡа күҙлектән сығып ҡарарға булышлыҡ итеүсе көс тип ҡарайбыҙ.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# КӨЛКӨ МЕНӘН...

## йәшәүҙе еңеләйтеп була

**"Беҙгә БарыБер" шаяндар һәм тапҡырҙар командаһы тәүге тапҡыр филармония сәхнәһендә "Шаян-шоу" фестивалендә сығыш яһай һәм быны 19 сентябрҙә "Өфө уттары"ның Колизео залында үҙенең 5 йыллыҡ юбилейына арналған ҙур шоу-концерт уҙғара. Команданың егеттәре - Линар "Дүрткүҙ", Вәғиз "Турғай", Руслан "Оҙонбуй" һәм Әлмир "Бамбучо" ошо концерт хаҡында иғлан баҫтырыу йомошо менән редакциябыҙға килгәйне. Улар менән башҡорт юморы, уларҙы йыйыу, сәхнә әҫәре итеп "әүәләү", ғөмүмән, юмор сәнғәте тураһында әңгәмәләшеп алдыҡ. Ҡайһы бер фекерҙәрен гәзит уҡыусыларға ла еткерәбеҙ.**



● Төрлө мәҙәк-ҡыҙыҡтарҙы тормоштан алабыҙ, бергәләп ултырып "әүәләйбеҙ", оҙаҡ репетициялар үткәреп шымартҡандан һуң ғына тамашасы хөкөмөнә сығарабыҙ. Беҙҙең юмор сейле-бешле булырға тейеш түгел, тигән принциптан сығып эш итәбеҙ.

● Кешене көлдөрөүгә ҡарағанда илатыуы күпкә еңелерәк - юмор стиле бик ауыр. Ә башҡорт юморын тамашаһыға саф башҡорт телендә үҙебеҙ күҙаллағанса алып барып еткереү икеләтә көс талап итә. Беҙҙең башҡорт юморына айырым ҡанундар хас һәм ошо ҡануңдар сиген бер нисек тә аша атлап булмай, быны эшләргә ярамай ҙа.

● Беҙҙең өсөн элек бары тик Ҡыҙыҡ һәм Мәҙәк кенә башҡорт юморын көүҙәләндерә һымаҡ ине. Бөгөн юмор өлкәһендә эшләрлек талантлы йәштәребеҙ байтаҡ, уларҙың һәр береһенең үҙенсәлекле шаярыу стиле бар. Беҙ, мәсәлән, кеше абруйына, дәрәжәһенә, минминлегенә ҡағылмаған, көмселектәрҙән көлмәгән, милләт, дин темаларын урап үткән юморҙы яратабыҙ һәм сәхнәләштерәбеҙ.

● Кемдер көләмәсте үҙ итмәй. Ә шул уҡ көләмәсте ниндәйҙер миниатюра аша, тормошҡа бәйле бер күренеш булараҡ сәхнәгә сығарһаң, иң "коро" кешене лә йылмайырға мәжбүр итеп була. Юмор яратмаған кеше юҡ ул, тик уны төрлөсә ҡабул итеү генә бар.

● Юмор һәр саҡ беҙҙең арала. Ул күп ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға, ҡайһы саҡ хәл ителмәҫтәй тойолған проблемаларға башҡа күҙлектән сығып ҡарарға булышлыҡ итеүсе, кешелекте ниндәйҙер кимәлдә алға этәреүсе көс тип ҡарайбыҙ.

● Юмор ысынбарлыҡҡа, үҙ-үҙеңә тәнҡит күҙлегенән сығып, бөгөнгөгә һәм киләсәккә оптимизм менән ҡараған кешеләрҙе үҙе янына йыя, ә улар күп булған һайын, тирә-яғыбыҙ ҙа яҡтыраҡ, донъя ла йәмлерәк күренәсәк. Шуға ынтылайыҡ, дуҫтар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йылмайыуҙың, ихлас көлөүҙең кеше йәшәйешенә ыңғай тәьҫир яһауын ғалимдар күптән иҫбат иткән. Яҡшы, изге юмор ыңғай энергия биреүсе, төрлө стрестарҙан арындырыусы сара икәнлеген дә онотмайыҡ һәм... "Беҙгә БарыБер" шаяндар һәм тапҡырҙар командаһының концертына юлланайыҡ.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 сентябрҙә** театр 91-се миҙгелен Нәжиб Асанбаев трилогияһы буйынса режиссер Айрат Абушахманов ҡуйған **"Әхмәтзәки Вәлиди Туған"** спектакле менән аса. Миҙгел асыу тантанаһы 18.00 сәғәттә театр алдындағы майҙанда дәртле концерт программаһы менән башлана.

**Белешмәләр өсөн телефон: 272-39-30.**

* * *

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 сентябрҙә** 21-се ижад миҙгеле Башҡортостан Республикаһы Суверенитетына 20 йыл тулыуға арнап, Таңсулпан Ғарипованың режиссер Рөстәм Хәкимов сәхнәләштереүендәге **"Ғилмияза"** драмаһы менән асыла. Спектакль 19.00 сәғәттә башлана.

**Белешмәләр өсөн телефон: 272-13-52.**

* * *

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23-24 сентябрҙә "Алтын көҙҙөң мондары"** исемле беренсе башҡорт һәм татар эстрада концерт-фестивале үткәрә.

72-се концерт миҙгеле **5 октябрҙә** Ҙур залда **"Илһам артынан сәйәхәт"** программаһы менән асыла. Концертта Ә.Юлсурина, Ф.Ғәниев, Л.Биктимерова, Р.Вәлмөхәмәтов, Ә.Нурғәлиева, В.Хызыров, Р.Амангилдина, А.Тимеров, Н.Тимерова, Р.Сәғитов, Ю.Ғәбитова, Р.Биктимеров, В.Рәхмәтуллина, С.Ильясова, М.Ҡотоев, "Далан", "Карауанһарай", "Ҡыҙыҡ-мәҙәк", БР Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры, Эстрада-джаз оркестры, БР Дәүләт академия хор капеллаһы һәм башҡа эстрада сәнғәте йондоҙҙары ҡатнаша. Ҙур концерт тамашасыларын 19.00 сәғәттә йыя.

**Белешмәләр өсөн телефондар: 250-12-00.**

ЙӘШЕЛ ДАУА

# БАЛАН



Баландың бөтә өлөштәре лә дауалау үҙенсәлегенә эйә: ҡабығы, ваҡ ҡына ботаҡтары, сәскәләре һәм, хатта, емештәренең ваҡ ҡына итеп иҙелгән һөйәктәре лә.

Балан менән дауалаған бөтә сирҙәрҙе лә һанап тормайым, сөнки кешенең бөтә ағзаларын да һанарға тура киләсәк, иң яҡшыһы медикаментоз дауалауға ауыр бирелеүсе бер нисә сирҙән рецепт бирәм. Ҡатын-ҡыҙ ауырыуҙарынан башлайыҡ.

Фибромиома, күремдең ауырттырып һәм күпләп килеүе. 1 стакан иҙелгән ҡабыҡҡа 0,5 литр араҡы ҡойоп 7 көн төнәтергә ҡуйырға. Балғалаҡлап 1/4 стакан һыу менән эсергә (көнөнә 2-3 тапҡыр, ашар алдынан).

Түллек кистаһы. Баландың һутын сәскә балы менән бутарға. 4 аҙна шундай схема менән ҡабул итергә: 1-се аҙнала иртәнсәк ас ҡарынға ҡалаҡ осонда ғына. 2-се аҙнала шулай уҡ иртәнсәк ас ҡарынға балғалаҡтың 1/3 өлөшө. 3-сө аҙнала - иртәнсәк һәм кискеһен берәр балғалаҡ. 4-се аҙнала - иртәнсәк һәм кискеһен берәр ҡалаҡ. 1 ай ял итергә. Артабан икенсе курс кәмеүгә табан бара, йәғни 1-се аҙнала - иртәнсәк һәм кискеһен берәр ҡалаҡ, 2-се аҙнала - иртәнсәк һәм кискеһен берәр балғалаҡ. 3-сө аҙнала - иртәнсәк ас ҡарынға бер тапҡыр. Иң һуңынан - иртәнсәк ҡалаҡ осонда ғына ҡабул итергә.

Төрлө яман ауырыуҙар тупланышы. Тигеҙ күләмдә балан һуты менән балды бутарға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 2-3 ҡалаҡ ҡабул итергә.

Һөт биҙе яман шеше. Яман шеш урынына яңы бешкән еләктәр иҙмәһенән сылатҡыс ябыу бик файҙалы.

Күҙ мөгөҙсәһенә төшкән аҡ. Тигеҙ күләмдә балан һуты менән балды бутарға, мотлаҡ әҙерәк ҡайнатып алырға, стерилле флаконға ҡойорға. Йоҡлар алдынан күҙгә 1 тамсы тамыҙырға.

Аяҡ һәм ҡулдарҙың тирселлеге. 1 аш ҡалағы балан ҡабығын 1 стакан һыуыҡ һыуға һалырға, ҡайнатырға һәм һүрән утта 10 минут бешерергә. Ҡабыҡ бешкән һутты көнөнә бер нисә тапҡыр тирегә һөртөргә.

Үт ташы ауырыуы, бөйөрҙөң таш ауырыуы. Был сирҙәрҙе дауалауҙың үҙенсәлекле алымы бар: әгәр балан һөйәген йотһаң һәм быны дауамлы рәүештә эшләһәң, үт һәм бөйөр ҡыуығында, бөйөрҙә, үт юлында һәм бауырҙа булған ҡомдарҙан, таштарҙан ҡотолорһоң. Көнөнә 10-15 һөйәк ашарға.

Хәүефле аборт (һәм шул ваҡытта тулғаҡ башланһа). 3-4 киҫәк ваҡ итеп туралған ҡабыҡҡа стакан менән ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут төнәтергә, һарҡытырға һәм йотомлап көн дауамында эсергә.

Шулай ҙа балан һәр кемгә лә килешеп етмәй. Ҡабығынан яһалған препараттар ҡан ойошоусанлығы юғары булған, тромбоз йыш ҡуҙғалтҡан кешеләргә ярамай. Гипотония ваҡытында ла баланды әҙләп кенә ҡулланырға кәрәк, сөнки ҙур күләмдә ҡулланған осраҡта ул баҫымды төшөрә. Балан менән ашҡаҙандың сей ярағын һәм гастриттарҙы дауалайҙар, ләкин ашҡаҙан һуты юғары кислоталы булған осраҡта уның зыян килтереүе ихтимал.




✓ ***Булмаған нәмәһе өсөн ҡайғырғандар түгел, ә булғанына шатлана белгәндәр аҡыл эйәһе булыр.***

***(Демокрит).***



ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# "КИСКЕ ӨФӨ" БАШЛАП ЕБӘРҘЕ,

## ә беҙ дауам итәйек

**"Үжәт"** - тиҫкәре, кеше һыңғайына йөрөмәгән кешегә ҡарата әйтелә. "Ул үжәтте ҡасан алып барып еткергәнсе". "Тиҙ генә ҡуҙғала һаламы ней ул, үжәт" - өләсәйем телмәренән.

**"Бимазалама"** - ҡамасаулама һүҙенә синоним, "Үҙем генә эшләйем, бимазаламай тор әле", "Бимазаламай тора, Шәрифә буламы?" - әсәйем телмәренән.

**"Һалығын һала"** - бөләһен һалыу мәғәнәһен бирә. "Беҙгә һалығын һалып үтте инде ғүмере", "Кешегә һалығынды һалмай йөрө, йөрөһәң" - өләсәйем телмәренән.

**"Былағай"** - ышаныслыҙ мәғәнәһендә. "Ул былағайға ышанһаң, ярыҡ кәмәгә терәп китмәҫ, тимә", "Торғаны менән былағай инде" һ.б. - ололар телмәренән.

**"Зыйтына тейеү"** - маҙаға тейеү мәғәнәһендә. "Зыйтына тейеп торма инде, сыҡһаң сыҡ та", "Көн дә һорапып килмәләр зыйтына тейеп" һ.б. - өләсәйем телмәренән.

**"Ҡышлыҡһыҙ"** - тиҙ өшөп барыусы өшөксән кешегә әйтелә был һүҙ. "Кышлыҡһыҙ, шул арала өшөнөңмө?", "Кайһылай ҡышлыҡһыҙһың, ҡыш көнө ҡалайтырһың?" - өләсәйем телмәренән.

**"Ҡәһәтләнеү, ҡәһәт итеү"** - уйлау, эште ерең еткереү мәғәнәһен бирәләр тип уйлайым. "Үҙенә әйтермен тип ҡәһәтләнеп йөрөйөм, айыу ғына сыҡмай", "Башҡа улай итмәм, тип ҡәһәт иткәнмен" - был юлы ант иткәнмен мәғәнәһендә ҡулланыла. "Кайтҡас та бер ултырып доға ҡылырмын тип ҡәһәтләнеп ҡайтып киләм"- былар барыһы ла өләсәйем телмәренән.

**"Хөсөт"** - насарлыҡҡа өгөт һүҙенә синоним. Ниндәйҙер насар эш эшләргә этәреү, өгөтләү. "Хөсөт биреүҙән башҡа ней эшең бар?", "Кешегә насарлыҡҡа хөсөт биреп ултырма" һ.б.

**"Мөстән"** - эҙләнеп, унда-бында инеп тентенеп йөрөгән кешегә өләсәйем: "Йөрөй шунда мөстән һыйыр һымаҡ эҙләнеп", - ти. "Кайҙа ғына ҡуйһаң да эҙләп ала бит әле, мөстән", - тип һуҡранып ала өләсәйем ҡайсаҡ.

**"Өшә"** - "Мәрхәбәнең килене күргәнем бар, торғаны бер өшә икән". "Өшәләнеп торма инде, матур итеп эшлә" - ялҡау, илке-һалҡы ғына эшләргә яратҡан кешегә ҡарата әйтелә был һүҙ.

**"Ыжыма"** - мыжыма һүҙенең синонимы. "Ыжымай ғына ултыр" һ.б.

**"Ристан"**. "Ристанмы әллә уны көнө-төнө эшләтеп", - тип һуҡрана өләсәйем ағайыма күп эш ҡушһалар. "Ристанмы әллә уны һаман һаҡлап йөрөп" һ.б. Шулай булғас, "ристан" - арестант һүҙенән алынған, моғайын.

**"Ҡасафаты"**. "Шуның ҡасафаты инде, ошолай ултырыуым". "Һуғыш ҡасафаты инде минең етем ҡалыуым", - тип һөйләй өләсәйем. Тимәк, ҡасафаты - ғәйебе тигәнде аңлата.

**"Изәғәләшмә"** - ирешмә, һүҙ көрәштермә,талашма мәғәнәһендә. "Изәғәләшмәй генә йөшәгеҙ", "Изәғәләшергә ярата бит инде ул", - ололар телмәренән.

**"Әләф-тәләф итеү"** - әрәм итеү мәғәнәһендә. "Ней арыу нәмәһе бар ине, әләф-тәләф итеп бөткән", "Әләф-тәләф итмәй генә ашатһан, бесән быйылға етәр", - өләсәйем телмәренән.

**"Үҙ мәйелең"** - үҙ теләгең һүҙенә синоним. "Бараһыңмы-юҡмы - үҙ мәйелең", "Ашатамы, юҡмы - үҙ мәйеле" - әсәйем телмәренән.

**"Шөрләк ҡошау"**. Алам-һолам, ни етте шуны кейеп йөрөгәндәргә өләсәйем, шөрләк ҡошап йөрөй, ти. "Быйыл йәй һыу һибешеп, лыс һыу булғайныҡ, өләсәйем "шөрләк ҡошап йөрөмәгеҙ, алыштырығыҙ өҫтөгөҙҙә", - тине. Минеңсә, "шөрләк" һүҙе шүрәле һүҙенән алынған. Яман, ҡот осҡос ҡиәфәтлеләргә әйтеләлер был лөғәт тип уйлайым. Бына ошондай һүҙбәйләнеш-лөғәттәр менән өләсәйем телмәрендә бихисап.

**"Зымзыя"**. "Үле генә зымзыя юҡ булды, эҙләп таба алманым, күҙ алдымда торған нәмә зымзыя юҡ булды". Тимәк, минеңсә, был һүҙ ҡапыл ғына юҡ булыуҙы аңлата.

**"Бәхәл"**. "Ағайындың күршеләре бәхәл генә йәшәйҙәр икән. Ней ашарҙарына, ней кейерҙәренә, тигәндәй". Өләсәйем, ярлы, насар ғына йәшәгән кешеләргә ҡарата ошо һүҙҙе гел ҡуллана.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әсәйҙәр, өләсәйҙәр телендә ҡулланылған лөғәттәрҙе йыйыуҙы шағир Әхмәр Үтәбай "Киске Өфө" гәзитендә башлап ебәрҙе. Уға беҙҙән дә ярҙам кәрәк, тип уйлайым. Үҙ телемә булған һөйөү, тәрән ихтирам мине лә ошо бәләкәй генә эҙләнеүҙәргә алып килде. Киләсәктә мин был эҙләнеүҙәремде дауам итеп, халҡымдың телен тағы ла ентекләберәк өйрәнеп, ошо лөғәттәр буйынса һүҙлек нәшер итергә теләйем. Бөгөн башҡорт телендә бик күп төрлө һүҙлектәр донъя күргән: антонимдар, омонимдар, синонимдар, фразеологик һүҙлек һәм башҡалар. Әммә быларҙың береһендә лә ошо мин үрҙә әйтеп үткән һүҙбәйләнештәрҙе таба алманым. Ә бит улар көндәлек тормошта, халыҡыбыҙ телмәрендә ҡулланыла. Уларҙы телдән юғалтмай һаҡларға кәрәк. Һеҙҙә, ҡәҙерле уҡыусылар, көҙрәтле телебеҙгә битараф булмаһағыҙ ине.**

**Лиза ЮНЫСБАЕВА.**

## З. БИИШЕВА ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТОСТАН "КИТАП" НӘШРИӘТЕ ТӘҠДИМ ИТӘ:




**В.А. Иванов. Әхмәт Ибн-Фаҙлан (урыҫ телендә).**

Билдәле ғалим-археолог, тарихсы, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры В.А.Ивановтың китабында X быуат ваҡиғалары сағыла. Унда Аббасид Хәлифәте менән Волга Булғарҙары араһында хәрби-сәйәси союз урынлаштырыу өсөн Волга Булғарына ебәрелгән Бағдад илселәре менән булған ваҡиғалар аңлайышлы телдә бәйән ителә.

Илселәр араһынан сәркәтип Әхмәт ибн-Фаҙлан маршрутты ентекле һүрәтләп, улар үткән ерҙәрҙәге йәшәгән халыҡ - оғуҙҙар, бәшәнәктәр, боронғо башҡорттар, Волга болғарҙары хаҡында мәғлүмәт яҙып ҡалдырған. Был яҙмалар Урта быуат дәүерендәге Урал-Волга буйы халыҡтарының тарихы һәм мәҙәниәтенә ҡағылған ҡиммәтле сығанаҡтарҙан һанала.

Китап мәктәп уҡыусылары, студенттар, тарих һәм мәҙәниәт уҡытыусыларына, шулай уҡ беҙҙең яҡтарҙың тарихы менән ҡыҙыҡһынғандарға тәғәйенләнгән.

**Китапты "Башҡорт китабы йорто" магазинында һатып алырға мөмкин. Адресы: Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. Телефон: 246-09-55.**


ИҒЛАН

Халыҡ-ара кимәлдәге **(Cambridge, ICELT)** тәжрибәле уҡытыусы, РФ дөйөм белем биреү алдынғыһы, инглиз теле уҡытыусыларының Рәсәй-Америка конкурсы **(TEA, 2001)** еңеүсеһе **инглиз телен** өйрәнергә теләүселәрҙән төркөм (6-9 кеше) йыя. Дәрестәр автор программалары буйынса үткәрелә.

**Тел.: 8-917-43-47-270, 256-98-04.**


АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АХЫРЫЗАМАН КӨТӘҺЕГЕҘМЕ?

## Ул бит көн дә булып тора!

Булмаған нәмәһе өсөн ҡайғырғандар түгел, ә булғанына шатлана белгәндәр аҡыл эйәһе булыр.

**(Демокрит).**

Йылдар күпкә өйрәтә, әммә өйрәнгәнде көндәр кире ҡаға.

**(Бенито Гальдес).**

Сер асам: һеҙ ахырызаман көтәһегеҙ, ә ул көн һайын булып тора.

**(Альбер Камю).**

Мөхәббәттә хаталанмаған кеше бер ваҡытта ла мөхәббәттә аҡыллы була алмай.

**(Теодор Рейк).**

Мәрхәмәтлек өлкәһендә бер проблема бар: беҙ һәр ваҡыт ете диңгеҙ арьяғындағыларға ярҙамға ташланабыҙ, ә үҙебеҙҙең күршеләр асыға.

**(Уилл Роджерс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыл эйәһенең алтын менән көпләнгән бик матур һауыты булған. Ул берҙән-бер көндө шулай тип белдергән:"Мин барыбер был һауыт менән файҙаланмайым, шуға ла уны донъялағы иң фәҡир кешегә бүләк итергә теләйем". Шунан һуң унын йортона бик күп фәҡир кешеләр килә, әммә аҡыл эйәһе "Һин донъялағы иң фәҡир түгел" тип, уларҙың береһенә лә һауытты бирмәй. Унын был ҡылығына барыһы ла аптырай һәм: "Һин был һауытты ысынлап та бирергә уйлайһыңмы, әллә шаярыуың ғынамы?"- тип һорайҙар унан. "Ысынлап та, мин был һауытты донъялағы иң фәҡир кешегә бирәм. Миңә килгән был кешеләр иң фәҡирҙәр түгел", - ти аҡыл эйәһе. "Ә нисек була һуң иң фәҡир тигәнең?" - тип һорайҙар унан. "Әйтәм. Донъялағы иң фәҡир кеше - ул беҙҙең батшабыҙ..."**

**Аҡыл эйәһенең был хәбәре батшаға барып ишетелә. Батша бик ныҡ асыулана һәм аҡыл эйәһен үҙенең һарайына алып килергә бойора. Аҡыл эйәһе килгәс, батша уны үҙенең байлығы һаҡланған келәткә алып инә һәм: "Һин был келәттә нимә һаҡланғанын беләһеңме?"- тип һорай. "Беләм, - ти аҡыл эйәһе. - Һин бында үҙеңдең алтын-көмөштәреңде һаҡлайһың". "Шуны белә тороп, ниңә һин мине донъялағы иң фәҡир кеше тип мыҫҡыллайһың?" - тип асыуын белдерә батша. Аҡыл эйәһе уға шулай тип яуап бирә: "Эйе, һинең алтын-көмөштәрең келәт тулы. Ләкин һин бит уларҙы үҙең өсөн дә, үҙеңдең халҡың өсөн файҙаланмайһың, улар бер файҙаһыҙға бына ошо келәттә ята. Һинең илең дә, халҡың да бик фәҡир. Шулай булғас, кем иң фәҡир кеше була инде?.."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Кин коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәррирәт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Таһир ИШКИНИН, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 3613